
Флүр ҒӘЛИМОВ
КЕНТАВР
Повесть

Майор Искәндәр Арыҫланов тыуған ауылына ҡайтып бара. Күкрәгендә “Ҡыҙыл Байраҡ”, “Батырлыҡ өсөн” ордендары, миҙалдар балҡый. Ул уртасанан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ буйлы, мыҡты кәүҙәле, ҡырҡ йәшкә ныҡлы яҡынлашҡан ир-уҙаман. Сәстәре салланған, йөҙө йонсоу, күҙҙәре һағыш, өмөтһөҙлөк менән томаланған, аҙымдары ауыр, бер аҙ уң аяғына аҡһай.

Искәндәр һуғыштан ҡайтып килә. Күкрәге тулы орден-миҙал булһа ла, яуҙан еңеүсе сифатында түгел, ә үҙенә ҡәҙерле һәм ғәзиз булған бөтә нәмәһен — яратҡан ҡатыны менән ҡыҙын, йәшлеген, яҡты өмөт-хыялдарын, сәләмәтлеген, хатта гражданлығын юғалтып ҡайтып бара.

Искәндәрҙең тәүге һуғышы Афған яуының һуңғы йылында булды. Был ғәрәсәттән иҫән-аман ҡотолғас, Тажикстанда урынлашҡан дивизияла ҡалдырылды. Шунан һуң күп тә үтмәне, Советтар Союзы тарҡалды, һәм улар, Рәсәйҙән ситтә хеҙмәт итеүселәр, гражданлыҡтарын юғалттылар. Әйткәндәй, гражданлыҡ тураһындағы яңы закон уларҙы ғына түгел, ә сит республикаларҙа йәшәүсе бер нисә миллион урыҫ халҡын да илһеҙгә әйләндерҙе.

Әлегә бөтә дивизиянан бер генә кеше, батырлығы өсөн “Рәсәй Геройы” алтын йондоҙо менән наградланған офицер ғына гражданлыҡ ала алды. Уныһы ла тура телеэфир мәлендә Рәсәй Президентының үҙенә мөрәжәғәт итеп, хәлен аңлатҡас...

Искәндәр үҙе лә заманында был оло исемгә лайыҡ була яҙғайны. Афғанда саҡта, бер ҡаты бәрелештә бихисап дошмандарҙы ҡырып, аҙ юғалтыуҙар менән ротаһын ҡамауҙан алып сыҡҡан өсөн комбат уны “Советтар Союзы Геройы”на тәҡдим иткәйне. Ләкин полктың штаб начальнигы полковник Сидоров награда ҡағыҙындағы “Герой” һүҙен һыҙып ташлап, “Ҡыҙыл Байраҡ” ордены тип төҙәткән. Имеш, бер эскән сағында: “Урыҫ булһа, һыҙмаҫ инем, “герой”ҙы ала ине”, — тип ысҡындырған, ти. Ни эшләйһең инде, үткән эшкә салауат, иң мөһиме, шул тиклем мәхшәрҙән иҫән сыҡты.

Тәүге Чечен яуы — Искәндәрҙең икенсе һуғышы. Унда барырға теләйме-юҡмы — һорап торманылар. Батальон командиры подполковник Горчаков саҡыртып алды ла ҡәтғи тауыш менән бойороҡ бирҙе:

— Чечняға китергә әҙерләнегеҙ, иртәгә үк юлға! — Искәндәргә бер килке төбәлеп торғандан һуң, әҙерәк йомшара төшөп, өҫтәп ҡуйҙы. — Иптәш капитан, һеҙ, элекке һауа-десант ғәскәрҙәре офицеры, Афғанда боевое крещение алған намыҫлы һәм батыр яугир буларaҡ, Чечняға ебәреүҙәрен һорап, рапорт тапшырырға бурыслыһығыҙ...

Нисек яҙмайһың инде? Рапорт бирмәһәң, ҡурҡаҡ тип уйлауҙары бар. Шулай итеп, утҡа барҙы ла керҙе Искәндәр.

Был һуғыш бигерәк тә ауыр, аяуһыҙ, шул уҡ ваҡытта сәйер һәм аңлайышһыҙ булды. Искәндәр һәр ваҡыттағыса яуҙың иң ҡыҙыуында йөрөнө. Ҙур йондоҙло хәрби түрәләрҙең булдыҡһыҙлығы, идара итә белмәүе, бәғзеләренең һатлыҡ йәнлеге арҡаһында һалдат кейеме кейгән күпме йәш егеттәр һәләк ителде. Нахаҡ яуҙа ҡорбан ителгән был бихисап йәндәр шәһит булып китә алғандармы, юҡмы?..

Беренсе Чечен һуғышы Рәсәй өсөн бик хурлыҡлы Хасавюрт килешеүе менән тамамланды. Был килешеүҙән һуң Чечнялағы хәрби час-

тар ҡуҙғытылған умарта кеүек геүләп торҙо, һалдаттар, бигерәк тә офицерҙар шул тиклем нәфрәтләнгәйне: уларҙы йәнә алданылар, күпме ҡорбандар килтереп, яфа сигеп яулай яҙған еңеүҙәрен урланылар. Улар бит күреп торҙо: чечен формированиелары бөтөнләй туҙҙырылып, ҡанһырағайны. Дошманды тамам тар-мар итергә бер ынтылыш етә ине...

Бер аҙҙан Чечня үҙен еңеүсе тип иғлан итте һәм Рәсәйҙән тиҫтәләрсә миллиард доллар контрибуция таптыра башланы...

Был һуғыш Искәндәргә лә оло шәхси фажиғә килтерҙе. Бөгөнгөләй хәтерендә: алыштар тынып торған бер иртәлә ярты шешә араҡы менән бит-ҡулын сайып алды ла, тушенкаға ҡушып ҡар һыуында баҫҡан ҡамырҙан бешерелгән йәймә ашағас, бер стакан араҡы эсеп ҡуйҙы. Һыу юҡ ине. Бер аҙҙан күптән көткән почта килтерҙеләр. Уға ҡатынынан хат бар икән, ниһайәт. Искәндәр ҡалтыранған ҡулдары менән конвертты асты:

*“Һаумы, Искәндәр, кәҙерлем минең!*

*Олеся менән беҙ иҫән-һаубыҙ, һиңә һағынышлы сәләмдәр ебәрәбеҙ, һалған аксаңды алдык, рәхмәт.*

*Искәндәр! Зинһар өсөн, ғәфү ит, һуғышта йөрөйһөң, һиңә шул тиклем ауырҙыр, аңлайым, шулай ҙа хәбәр итергә тейешмен: мин һинең менән айырылышырға карар иттем. Тыныс кына уйлаһаң, мине аңларһың. Өйләнешкәнебеҙгә ете йыл, ә бергә йәшәгән көндәребеҙҙе һанаһаң — ике йылға ла тулмай бит...*

*Һин хәҙер икенсе һуғышта йөрөйһөң. Ә хөкүмәт һиңә фатир ҙа бирмәне (бәлки, беҙ унда йәшәп һине көтөр инек). Ниндәй фатир! Һиңә бит хатта граждандлык бирмәнеләр...*

*Мин һине яратам. Бәлки, мин һинең кеүек ирҙе башка осрата ла алмаҫмын. Ләкин, кыҙғаныска каршы, беҙҙең һинең менән киләсәгебеҙ юк.*

*Кисер мине, мин һине ете йыл көттөм, башкаса булдыра алмайым.*

*Зинһар өсөн, үҙеңде һакла. Һин көслө кеше бит, минһеҙ йәшәй алаһың.*

*Хуш! Сәләм менән Татьяна”.*

Был хатты уҡып сыҡҡас, күҙ алдары ҡараңғыланып, йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды. Быға тиклем ниндәйҙер өмөт менән йәшәй ине: бына һуғыш бөтөр, ул яратҡан ҡатыны менән ғәзиз балаһы янына ҡайтыр. Ниһайәт, фатир алырҙар, әҙәмсә донъя көтә башларҙар. Олесяһы бигерәк тә йәл. Һары сәсле, зәңгәр күҙле мәрйәнән тыуған ҡараҡай ғына ҡыҙсыҡ. Был аяуһыҙ донъяла атайһыҙ нишләрһең икән?

Кем белә, Искәндәр Чечнянан еңеүсе булып ҡайтһа, бәлки, ҡатыны уны ташламаҫ та ине...

Икенсе Чечен һуғышына Искәндәр үҙе теләп китте. Дөрөҫөрәге, ғаиләһенән яҙғандан һуң, йән ғазаптарына түҙә алмай, күңелен бошонҡо уйҙар биләгәйне: бөтәһен дә юғалттым, йәшәүҙең йәме ҡалманы, һуғышта үлтерһәләр, исмаһам, балама пособие бирерҙәр... Ләкин үлтермәнеләр, имгәттеләр генә.

Бына әле шунан, үҙенең өсөнсө һуғышынан ҡайтып килеүе, һуңғы яраланыуынан һуң уны хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табып, армиянан бөтөнләйгә ебәрҙеләр. Шулай итеп, хәрби карьераһы тамамланды. Киләсәккә бағлаған ҙур өмөт-хыялдар яҡты йондоҙ булып бер балҡыны ла күҙ асып йомғансы атылып төшөп китте.

Ул бит генерал булырға хыялланғайны. Һәм бының өсөн бөтә сифаттары ла бар ине: аҡыл, белем, рух ныҡлығы, көс-ғәйрәт, ҡыйыулыҡ, ойоштороу һәләте, ҡул аҫтындағыларҙы тыңлата, әйҙәй белеү.

Хәрби училищела Искәндәр иң алдынғы курсанттарҙан иҫәпләнде. Каратэ менән шөғөлләнеп, хәрби округ чемпионы булды. Атышыу буйынса уның алдына сыға алған курсант юҡ ине. Ул саҡтарҙа уҡ астрология менән мауығыусы һабаҡташы Полянин уға: “Тыуған йылың 1966 — утлы Ат йылы, айың декабрь Уҡсы йондоҙлоғона ҡарай. Тимәк, һин — Кентавр, тыумыштан яугир шәхес. Һинең тояҡтарың аҫтында ҡалыусыларҙы Алла үҙе һаҡлаһын”, — тигәйне. Бер килке уйланып торғандан һуң, Полянин ҡулына бинокль алып, былай тип өҫтәгәйне: “Хәҙер һинең йондоҙлоғоңдо — Кентаврҙы күрһәтәм”. Төнгө күкте байҡағандан һуң, ул ҡысҡырып уҡ ебәрҙе: “Таптым, бына ул!”. Биноклде Искәндәргә һуҙҙы: “Анау яҡҡа ҡара!”. Искәндәр Кентаврҙы шунда уҡ күрҙе — осһоҙ-ҡырыйһыҙ серле төнгө күктә ул иҫ-аҡыл еткеһеҙ бейеклектәргә төбәлеп, уҡ-һаҙағын киреп тоҫҡап тора ине. Әйтерһең, бына хәҙер уғын сойорғотоп ебәрер... Ниндәйҙер эске тетрәнеү кисергән Искәндәр: “Минең халҡым башҡорт та Кентавр бит! Уң ҡанаты ат булған, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланып, нисә быуат дошмандарға ҡаршы яу сапҡан...” — тигәйне. “Кентавр — күктең көньяҡ ярымшарында урынлашҡан, һинең яҙмышың да көньяҡ менән бәйле булыр”, — тип һүҙен йомғаҡлағайны Полянин ул саҡта...

Шул көндән уға “Кентавр” ҡушаматы йәбеште лә ҡуйҙы. Һабаҡташтары аҙаҡ һирәк-һаяҡ осрашҡанда, гелән Искәндәрҙе иҫтәренә төшөрөп, бер-береһенән һорашыр булдылар: “Беҙҙең Кентавр күренмәйме? Ул хәҙер әллә ҡайҙарға күтәрелгәндер инде, иңдәрендә ҙур йондоҙҙар балҡыйҙыр. Генерал булып китмәҫ тимә...”

Эх, йәшлек... Тиле йәшлек. Хәҙерге армияла генерал дәрәжәһенә күтәрелеү өсөн нимә кәрәк икәнен Искәндәр әле яҡшы аңлай ҙа бит. Иң тәүҙә «блат», йәғни өҫтә бәйләнештәр, һине үргә өҫтөрәрлек йөнтәҫ ҡул булыу фарыз. Шунан яраҡлашыу оҫталығы: үҙеңдән өҫтәрәктәргә ярай белеү, ваҡытын һиҙеп, өнөңдө тығыу, кәрәк саҡта бушбоғаҙланыу һәм юҡ эшеңде бар итеп күрһәтеү маһирлығы. Иң мөһиме: командирыңа унан аҡыллыраҡ икәнеңде күрһәтә күрмә — бөтөрәсәк! Иҫәрерәк булып күренһәң күрен, әммә аҡыллыраҡ икәнеңде белгертмә. “Ты — начальник, я — дурак, я — начальник, ты — дурак”, “Тебе хорошо, ты дурак, а мне притворяться приходится” тигән әйтемдәр берҙә юҡтан ғына киң таралмаған бит. Ни эшләтәһең, беҙҙә иҫәрҙәрҙе яраталар, ә аҡыллыларҙы күрә алмайҙар шул. Грибоедовтың “Горе от ума” әҫәре лә быны иҫбат итә. Ул замандарҙан һуң ике йөҙ йыл тирәһе ғүмер үткән, бер нисә тапҡыр йәмғиәт ҡоролошо алышынған, ә Рәсәйҙә ғәҙәттәр һаман шул көйө... Әлбиттә, яраҡлашыу сифаттары Искәндәрҙең булмышынан бик йыраҡ. Һәм ул, ҙур маҡсаттарға ирешеү өсөн, үҙенең кешелек тәбиғәтен бик теләһә лә үҙгәртә алмаҫ ине.

Эйе, яҡынса етмешенсе йылға ҡәҙәр әле армияла коррупция, «блат», күҙ буяусылыҡ, групповщина кеүек нәмәләр ныҡ таралмаҫ борон, талантлы һәм намыҫлы офицерҙар үҙ көстәренә генә таянып, ҙур дәрәжәләргә үрләй ала ине әле. Әгәр ҙә урыҫ булһалар... Башҡа “ваҡ-

төйәк” милләт вәкилдәренә Рәсәй армияһында борон-борондан ышаныс күрһәтелмәне һәм, ниндәй генә һәләтле булһа ла, мәҫәлән, башҡорт кешеһенең генерал дәрәжәһенә етеүе мөғжизәгә тиң ине.

Әлбиттә, Афғанда “Герой” йондоҙон ала алһа, ҙур хыялына яҡынлашыр өсөн мөмкинлектәре күбәйер ине. Ләкин... Алтын йондоҙҙо шул урыҫ булмағанға бирмәнеләр бит инде.

Уйҙарға батып килә торғас, Искәндәр тыуған ауылына яҡынлашты. Юл ыңғайы тау итәгендәге ағаслыҡҡа боролдо. Унда сылтырап ағып ятҡан шишмә янында туҡтаны. Был инеште ауыл халҡы ҡасандыр “Бәхет шишмәһе” тип атаған. Искәндәр ятып һыу эсә башланы. Һыуыҡ һыу эсеп туйғыһыҙ тәмле ине. Ләкин ул һыуһынын ҡандырып өлгөрмәне, Чечняла булған ваҡиға ҡапыл иҫенә төшөп, сәсәргә кереште. (Берәй нәмә эскән саҡта был хәл йыш ҡына иҫенә төшөп, күңеле болғана).

Беренсе Чечня һуғышында, ҡыҙыу бәрелештәр барған осорҙа, һыу менән тәьмин итеү өҙөлгәйне. Ныҡлы сарсаған яугирҙар әмәлен тапты: эргәләрендәге яртылаш емерек бинаның ҡыйығынан тамған тамсыларҙы котелоктарына йыйып эсәр булдылар. (Түбәлә ятҡан ҡар көндөҙ ҡояш нурҙарында ireп тамсылай ине). Алыштар бер аҙ баҫылғас, абайлабыраҡ ҡараһалар — ҡыйыҡ башындағы йоҡа ҡар аҫтында күмелер-күмелмәҫ кенә үлек һалдаттар ятҡан икән...

Искәндәр был ауыр иҫтәлекте ҡыуырға тырышып, башын һелкеп алды, битен, ҡулдарын йыуҙы ла ағас төбөнә ял итергә ултырҙы. Уйсан ҡарашы менән тирә-яҡты байҡаны. Әле йәйҙең һуңғы өлөшө — август баштары ине. Көн матур, йылы, тирә-йүн ҡояш нурҙарына күмелгән, донъя илаһи хозурлыҡҡа сорналған.

Искәндәрҙең тән һәм йән яраларынан өшөгән күңеле бер аҙ имшегәндәй итте. Күңел түрендә ниндәйҙер өмөт саҡҡыһы яралды. Кем белә, бәлки, аяуһыҙ яуҙарҙа юғалтҡан бәхетен, үҙенә тейешле өлөшөн тыуған ерендә табыр? Ул бит әле ҡырҡҡа ла етмәгән, бәлки, яңынан ғаилә ҡорор, балалар үҫтерер, атай нигеҙенә йорт һалыр, усаҡты яңынан ҡабыҙыр.

Бер аҙ кәйефе күтәрелеп киткән Искәндәр йылға буйына килеп етте. Уның бала сағы ошо ҙур булмаған Ҡамалы буйында үтте. Йылға әле һайыҡҡан һымаҡ. Ә ярҙарында үҫкән тирәктәр, кирәһенсә, ныҡлы ҙурайғандар. Искәндәр үҙенең балалыҡ һуҡмаҡтарын эҙләне. Ләкин таба алманы. Бына ошонда элек тәрән генә соңғол була торғайны. Унда йәй буйына һыу инәләр, балыҡ ҡармаҡлайҙар, яр буйындағы ҡомлоҡта ҡыҙыналар ине. Соңғол юҡҡа сыҡҡан... Соңғолдан йыраҡ түгел, ҡуйы таллыҡ эргәһендә, түңәрәкләнеп кенә ҡырсынлыҡ ята ине. Яҡындағы ҡуйы урманлы тау итәгенән аръяҡтағы ҡырсынлыҡҡа тиклем тәрән генә йырын һуҙылғайны. Таллыҡ юҡ, уның урынында ҙур тирәктәр үҫә, ҡырсынлыҡтың остоғо ғына ҡалған, ә йырын бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан.

Искәндәргә яманһыу булып китте, күңелендә балалыҡ йылдарын һағыныу, ностальгия тойғоho яңырҙы. Ул хәҙер нисә йыл хыял итә: бына тыуған ауылына ҡайтыр ҙа, балалыҡ һуҡмаҡтарынан үтер, теге соңғолда һыу инер, ҡомонда ҡыҙыныр, йәшлек дуҫтары менән осрашыр, яралы тәненә һәм йәненә сихәт табыр. Хәтерендә ҡәҙерләп һаҡлан-

ған урындар, бала саҡ һуҡмаҡтары ниндәйҙер егерме йыл эсендә юғалып булған.

Искәндәр башын күтәрҙе лә ҡарашын Ҡыҙҙар тауына йүнәлтте. Йылғаны кисеп сығып, тауға табан атланы. Бер аҙҙан ул бейек ҡая башында баҫып тора ине. Тыуған ауылы бынан ус төбөндә кеүек күренә. А-ана, уның тыуған йорто етемһерәп ултыра. Атай нигеҙендә уны бер кем дә һағынып көтмәй. А-ана, клуб, мәктәп. Ауыл уртаһындағы түңәрәк күл эргәһендә ғүмерҙә лә онотолмаҫлыҡ тәүге мөхәббәтенең өйө. Ул ҡайҙарҙа икән хәҙер?

Искәндәр тыуған ауылына күҙҙәре талғансы ҡарап торҙо, һағындырған. Шунан иғтибар менән тау башын ҡарашынан үткәрҙе. Ҡыҙҙар тауы ла үҙгәргән һымаҡ. Элек уның ҡаялары текәрәк кеүек ине. Үрелеп, эргәһендәге ҙур ташты һыйпаны. Таштың бер бәләкәй өлөшсәһен һаҡ ҡына тарткайны, ҡупты ла сыҡты. Аптырап ҡалған Искәндәр таш киҫәген һындырғыланы, ваҡланы, ыуып ташланы.

Эй, донъя... Был донъяла ағастар, йылға-үҙәне, күлдәр генә түгел, хатта тау-таштар ҙа үҙгәрә икән. Ваҡыт тигән аяуһыҙ нәмә хатта ҡаяларҙы онтай. Кешеләр хаҡында ни әйтәһең инде.

Баҫыу ҡапҡаһын үткәс, һулға боролоп зыяратҡа инде. Атаһы менән әсәһенең, ике ҡустыһының ҡәберҙәре йәнәшә генә урынлашҡан, шул уҡ рәттә олатаһы һәм өләсәһе ята. Ата-әсәһе ҡартайып вафат булды. Ә ҡустылары, береһе эсеп, икенсеһе аҫылынып үлгәндәр. Әлеге лә баяғы эскелек арҡаһында.

Искәндәр әсәһен ерләргә ҡайтҡайны, атаһы менән ҡустыларын һуңғы юлға оҙата алманы. Телеграмма һуғыш яланына һуңлап килгәйне шул. Үкенескә ҡалды.

Яҡындарының ҡәберҙәрен кипкән үләндәрҙән таҙартты, эргәләге сүп-сарҙы, араҡы-һыра шешәләрен йыйыштырғыланы. Бер аҙ ҡәберҙәргә ҡарап торғандан һуң, “тыныс ятығыҙ” тип шыбырланы ла, зыяраттан сығып, ауылға табан атланы.

Әле көн үҙәге, шуға ҡарамаҫтан, ауыл урамы буп-буш. Ирекһеҙҙән йәнә бала сағын иҫенә төшөрҙө. Элек йыл әйләнәһенә ауыл урамдары балалар сыр-сыуынан яңғырап, гөрләп торор ине. Бала-саға күп була торғайны, улар ниндәй генә уйындар уйнаманы.

Искәндәр өйҙәренә ҡайтып етте, ниһайәт. Атай йорто ныҡлы иҫкергән. Кемдер тәҙрә ҡапҡастарын ябып, арҡырыға таҡта ҡағып ҡуйған. Ишек алдын кесерткән баҫҡан, кәртә-ҡура сереп ауып бөткән. Ишектә йоҙаҡ-фәлән юҡ. Етемһерәп ҡалған өйҙәренә, йорт-ҡураға оҙаҡ итеп ҡарап торҙо. Тыуған йортон йәлләү тойғоһо уянды күңелендә. Ҡасан ғына әле ошо ҙур булмаған өй эсе гөрләп торҙо. Бер һике булып ашарға ултырырҙар ине: ата-әсәһе, өләсәһе һәм биш бала.

Йорт алдындағы бәпкә үләнендә тәгәрәшеп уйнап үҫтеләр бит. Ә уларға тиклем был нигеҙҙә ҡартатаһы һәм уның ата-бабалары ғаиләләре менән көн күргән. Ҡайҙа ғәйеп булып бөттөгөҙ һуң һеҙ? Ниндәй ел-дауылдар алып китте һеҙҙе? Ай күрҙе, ҡояш алды. Был йортта бала-саға сыр-сыуы йәнә яңғырармы, нигеҙ ҡоромаҫмы?

Ейәндәре тешәгән осорҙа өләсәләре өйрәтеп ултырыр ине: “Искәндәр улым, төшкән тешеңде бүрәнә ярығына ҡыҫтырып ҡуй. Шулай итһәң,

күп йылдар үткәс, ошо нигеҙҙә нәҡ һинең кеүек Искәндәр исемле малай йәшәйәсәк". Был хөрәфәт дөрөҫкә сығып, уларҙың нәҫел ебе өҙөлмәһен, нигеҙе ҡоромаһын ине.

Искәндәр һаҡ ҡына өйгә инде. Ҡараңғы өй эсендә тимер карауат, һике, алама өҫтәл, бер-ике ултырғыстан башҡа нәмә юҡ. Күрәһең, атаәсәһе, ҡустылары үлгәндән һуң, ситтә кейәүҙә булған Фирҙәүес һеңлеһе өй йыһаздарын алып киткәндер.

Искәндәр тышҡа сыҡты, арҡыры таҡталарҙы аҡтарып алып, тәҙрә ҡапҡастарын асты. Иҫке ҡоҙоҡтан һыу алып инеп, өй эсен йыуыптаҙартып сығарҙы. Келәттән тутығып бөткән салғы ишаратын табып, йортто баҫып киткән кесерткәнде сабып ташланы.

Йорт-ҡаралтыны йәнә күҙенән үткәргәс, ирекһеҙҙән Чечня ауылдарында күргән шәхси өйҙәрҙе иҫенә төшөрҙө. Унда йорттар быуаттарға етерлек итеп кирбестән һалынған: ике-өс ҡатлы, йәиһә бер ҡатлы, әммә оҙон, "п" хәрефе формаһында төҙөлгән. Ҡоймалары таштан, ҡыҙыл кирбестән ҡоролған. Эйе, чечендар боронғо алпауыттармы ни, бик хәлле йәшәйҙәр икән. Ҡайҙа инде уларҙың тормошон беҙҙәге күпселек халыҡтың хәйерсе көнитмеше менән сағыштырыу.

— Ҡайтып та етмәгән, эшкә тотонған, — тип өндәште уға таныш тауыш. Әйләнеп ҡараһа, алдында балалыҡ дуҫы Хәмит йылмайып баҫып тора. Искәндәр ҡапылғара уны таныманы. Ҡаршыһында ауылдың элекке беренсе егете түгел, бөтөнләй икенсе Хәмит ине. Йөҙө күк яшыҡ, алғы тештәре ҡойолған, күҙҙәре тоноҡланған. Йәш саҡтағы мыҡты кәүҙәһенең шәүләһе генә ҡалған, төртһәң, йығылырға тора.

— Сәләм, дуҫ! — Хәмит уны ҡосаҡлап алды. Шул ыңғайы Искәндәрҙең танауына йылдар буйы өҙлөкһөҙ эскән кешенең ауыр еҫе килеп бәрелде.

— Теге ваҡыт әсәйеңде ерләргә ҡайтҡанһың икән, ун биш суткала ултырып, һине күрмәй ҡалғанмын, — Хәмит мышнап, иламһырап алды. — Әле ҡайтыуыңды ишеткәс тә, бисә күрмәгәндә өйҙән бер тоҡ арпа сәлдерҙем дә теге ҡарун Ғаязға алып барып бер шешә самогонға алмаштырҙым! Әйҙә, йыуабыҙ ҡайтыуыңды! — Хәмит бик ҙур егетлек эшләгәндәй шат йылмайҙы.

Искәндәр дуҫына ҡарап тағы тетрәнеп ҡуйҙы. Ниндәй шәп, ҡыйыу, күңелле, көслө егет ине йәш саҡта. Әле ҡайһылай емтеккә әүерелгән.

— Әйҙә, әйҙә, әлбиттә, йыуабыҙ, — тигән булып, Искәндәр уны өйгә әйҙәне.

Ултырышып та өлгөрмәнеләр, ишек шар асылып китте лә, киң йылмайып йәшлек дуҫы Иҙрис килеп инде. Ҡулына бер шешә араҡы тотҡан.

— Сәләм, брат! Һине күрер көн дә бар икән! — Улар ҡосаҡлаштылар. Иҙрис шап иттереп шешәһен өҫтәлгә ултыртты ла Хәмиткә ымланы: — Ә был алкаш бында нимә эшләп ултыра?

— Үҙең кем һуң, үҙең? Нисә тапкыр кодироваться иттең? Әле, ана, тағы ысҡынғанһың. Мин хет кодировкаға бармайым, бер көйгә эсеп тик йөрөйөм! — тип асыулы яуапланы Хәмит. Иҙристең шешмәк йөҙө буҙарынып китте, йоҙроҡтары төйнәлде. Быны күреп, Искәндәр уларҙы тынысландыра һалды:

— Булды, егеттәр, шымдыҡ! Әйҙә, лутсы берәрҙе эсәйек! — Ул араҡы ҡойҙо. Дуҫтары менән сәкәштереп эсеп ебәрҙеләр. Бер аҙ ҡапҡылап та өлгөрмәнеләр, урамда гармун тауышы ишетелде. Кемдер таҡмаҡлап ебәрҙе:

Әбей бәлеш бешергән
Һамарский кишерҙән.
Әбей, беҙгә үпкәләмә,
Беҙ әҙерәк төшөргән.

Өйгә гармун уйнап Искәндәрҙең класташ дуҫтары Сәлим менән Шәриф килеп инде. Улар апаруҡ ҡыҙмаса булғандар. Сәлим гармун, Шәриф бер сирек әсе бал тотҡан.

— Һаумы, класташ! — Улар ҡосаҡлашып иҫәнләштеләр. Искәндәр дуҫтарына сәйерһенеп ҡарап ҡуйҙы: егеттәр ныҡлы таушалған. Әле ҡырҡҡа етмәһәләр ҙә, йөҙҙәре сырышып ҡарайған, кәүҙәләре бәләкәйләнеп ҡалған. Үҙҙәре икәүләшеп таҡмаҡлаған булалар бит әле:

Анау тауҙың башынан
Тәгәрәтәләр мискә.
Әбей, ҡыҙың бигерәк нескә,
Түҙер микән бер кискә.

Иҙрис мыҫҡыллы йылмайып Искәндәргә шыбырланы:

— Эх, меҫкендәр! "Ҡыҙ" тип йырлаған булалар. Үҙҙәре ҡырҡҡа етте — өйләнә алманылар.

Эстеләр, йәш саҡтарын, дуҫ-иштәрен иҫкә алып, гәпләшеп ултырҙылар. Төрлөһө төрлө яҡҡа таралышып, ауылда әҙ ҡалғандар икән. Күбеһе ҡалаларға киткән, ҡайһыһы Себергә олаҡҡан, бәғзеләре теге донъяға...

Сәлим йәнә ҡысҡырып таҡмаҡлай башлағайны, Шәриф уны тыя һалды:

— Сеү, детское время прошло, шымыраҡ йырла! Әтеү теге кавказлылар ишетеп ҡалһа, кәрәкте бирерҙәр...

Дуҫтары, "кавказлылар" тигән һүҙҙе ишеткәс, иҫерек булһалар ҙа, нисектер ҡурҡып киттеләр. Искәндәр ғәжәпләнеп һораны:

— Ниндәй кавказлылар ул?

— Ә-ә, кавказ кешеләре инде, әллә дағстан, әллә чечен, беҙҙең колхозды һатып алдылар.

Искәндәр нығыраҡ аптыраны:

— Нисек инде һатып алдылар, колхоздар ҙа һатыламы ни хәҙер?

— Нисек булһын, аукцион аша. Хәҙер бөтә нимә лә һатыла, аҡсаң ғына булһын, — тип яуапланы Иҙрис.

— Колхоз һынлы колхоз ҡыйбат киткәндер инде?

— Идара, МТМ, зерноток, тирмән, пилорама, заправка, ике йөҙ баш һыйыры менән ферма, ҡырҡ ике берәмек техника — барлыҡ мөлкәт — бер миллион ярымға һатылған, — тине Иҙрис уйсан йөҙ менән.

Берауыҡ өнһөҙ ултырғандан һуң Искәндәр телгә килде:

— Миллион ярым яҡынса илле биш мең доллар була, арзаныраҡ киткән...

— Аукцион — аукцион инде, ҡыйбатыраҡ хаҡ биреүсе булмаған, — Иҙрис көрһөнөп ҡуйҙы ла дауам итте. — Быйыл ер пайҙарға тара-

тылып, приватизация үткәреләсәк. Был кавказлылар беҙҙең хәйерсе халыҡтың ерҙәрен арзанға ғына ҡамар инде.

— Эх, егеттәр... Ошо колхозда атай-олатайҙарыбыҙ күпме тир түккән, ә һеҙ уны кавказлыларға һаттырғанһығыҙ. Ата-бабаларыбыҙ нисә быуат ошо изге еребеҙ өсөн ҡан ҡойған, хәҙер килеп уны ла ете яттарға һатабыҙмы? Быға юл ҡуйһаҡ, кешелегебеҙ, халыҡ тигән исемебеҙ дөрөҫ булмаҫ... — тине Искәндәр әсенеп.

— Нишләйек һуң? Улар бай, ҡоралланған, һәр береһенең пистолеты бар, ти. Түрәләр ҙә улар йырын йырлай, — тип һүҙгә ҡушылды Хәмит.

— Берҙәм булырға кәрәк. Бер төптән булһаҡ — еребеҙҙе талай алмаҫтар. Ә ерһеҙ ҡалһаҡ — илдән яҙабыҙ. Яңы хужалар беҙҙе батрак итеп тә алмаҫ. — Искәндәр бер аҙ шымып торҙо ла дауам итте. — Донъя тарихындағы бөтә һуғыштар ҙа тиерлек шул ер өсөн башлана. Еребеҙҙе сит-яттарға анһат ҡына бирәбеҙ икән — бөтөүебеҙ шул булыр.

Быға тиклем күңелле итеп ултырған дуҫтары нисектер шымтайышып ҡалды. Әмәлгә ҡалғандай, эсемлек тә бөткәйне. Искәндәр уларҙы йәнә күҙенән үткәрҙе. Эх, тормош тигәнең, имән кеүек егеттәрҙе эшлектән сығарған да ташлаған. Замана сире, шул эскелек инде... Оло ағайыбыҙҙың өйрәткән һөнәре. Был араҡы ҡолдары әлеге ҡырағай баҙар шарттарында үҙҙәренең ерҙәрен һаҡлап алып ҡала алырҙармы? Пайҙарын бер яртыға һатып эсмәҫтәрме? Ә ниңә шул тиклем эсәләр, уларға нимә етмәй һуң? Ҡәҙерен белеп йәшәй белһәң, тормош матур бит. Ауылдарында мәктәп директоры булып эшләгән Ришат дуҫы бер нисә йыл элек уға әсенеп хат яҙғайны шул. Имеш, ауылдың бөтөнләй рәте китте. Уҡымышлы, аҡыллы кешеләрҙең, аҫыл нәҫелдәрҙең һәйбәт тормош эҙләп ҡалаларға, Себергә китеүе һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында ауылыбыҙ һүнә, эскелек, иманһыҙлыҡ һаҙлығына батып бара. Үҙ ғаиләһен хәстәрләй алыусы ир-аттарыбыҙҙың яҡынса ярты өлөшөн генә ысын ир-егеттәр тип атап була. Ҡалғандары әтрәгәләм, байғош, меҫкен алкаштарға әйләнеп бөттө.

Тынлыҡты Шәриф боҙҙо. Эске кеҫәһенән этикеткаһына “Трояр” тип яҙылған бәләкәй генә шешә сығарҙы ла шап иттереп өҫтәлгә ултыртты:

— Егеттәр, минең ”фанфурик” бар!

— Нәмә, был ағыуҙы эсеп һинең дә үлгең килдеме ни?! — Иҙрис ҡысҡырып ебәрҙе.

Яңыраҡ ауылда ғибрәтле фажиғә булған икән. Етмеш йәшлек Ситдыҡ ҡарт ошондай “Трояр”ҙы эсеп үлгән. Уны ерләгәндән һуң, зыяратта төшкән хәйер аҡсаһына шул уҡ “Трояр” алып эсеп, йәнә ике ир теге донъяға киткән...

Гигиена өсөн ҡулланыла торған был шыйыҡсаны ауыл ирҙәре үҙ-ара “фанфурик” тип атап йөрөтә. Уны шәйләгәс, Хәмиттең һүнеп бөткән күҙҙәре йылтырап китте һәм ул арбалғандай шешәгә үрелде.

— Ҡуй, егеттәр, күрәләтә ағыу эсмәгеҙ. Уны бит ағыулы техник спирттан яһайҙар, — тип тыйҙы уларҙы Искәндәр. Хәмит ҡул ғына һелтәне:

— “Фанфурик” эскән бар инде, мыңарсы бер ни ҙә булманы...

— Техник спирт сразу үлтермәгән хәлдә лә, бер нисә йылдан барыбер теге донъяға ебәрә, — тип аңлатырға тырышты Искәндәр. Шәриф “фанфурик”ты кеçәһенә кире йәшерҙе.

Оҙаҡламай дуçтары өйҙәренә таралышты. Искәндәр өçтәлде йыйыштырҙы ла, урын әтмәләп, йоҡларға ятты.

Иртәнсәк сәй эсеп алғас, түрәләргә барырға булды. Уны бигерәк тә колхоздың яңы хужалары ҡыҙыҡһындырҙы: ниндәй “кавказлылар” икән?

Иртә булыуға ҡарамаçтан, колхоз идараһы эргәһендә бер нисә еңел машина һәм “текә” ҡара джип тора. Тимәк, яңы хужа урынында, тигән һығымта яһап, Искәндәр бинаға инде. Иртәнге наряд башланмаған икән әле. Ҡабул итеү бүлмәһендә секретарша-фәлән булмағас, Искәндәр ишекте шаҡып, бүлмәгә үтте. Кабинетта өс кавказ кешеһе ултыра ине. Хужа урынындағыһы урта йәштәрҙә, эргәһендәгеләре йәшерәк. Искәндәр яңы хужаны сырамытҡандай итте, тик ҡапылғара иçенә төшөрә алманы. Берауыҡ уға текәлеп ҡарап торҙо. Искәндәрҙе күреп, хужаның да күҙҙәре ялтлап китте. Бер-береһенә тишерҙәй итеп күпме ҡарашып торғандарҙыр. Искәндәр шомло тынлыҡты боҙҙо:

— Һаумыһығыҙ, мин колхоздың яңы етәксеһен күрәйем тип килгәйнем. — Ул йәнә хужаға төбәлде. — Әммә беҙ таныш, шикелле. Ҡапыл ғына иçемә төшөрә алмайым...

Хужа кеше Искәндәргә тишә ҡарап торҙо. Орден-миҙалдарын күҙенән үткәргәс, мыçҡыллы йылмайғандай итте. Ниһайәт, яуап бирҙе:

— Мин һеҙҙе танымайым. Кем булаһығыҙ, ни йомош? — Уның ярандары Искәндәрҙе күрә алмаусан ҡараштары менән быраулаНы. Искәндәр уларҙың ауыр ҡараштарын күтәрә алды. Ултырғысҡа ултырҙы ла:

— Мин, һауа-десант ғәскәрҙәре майоры Искәндәр Арыçланов, Чечен һуғышынан тыуған ауылыма йәшәргә ҡайттым. Ә һеҙ кем булаһығыҙ, — тип ҡоро ғына һорау бирҙе.

Ярандары тынысһыҙланып ҡуҙғалғайны, хужа уларҙы күҙ ҡарашы менән тыйҙы ла, Искәндәргә яуап бирҙе:

— Мин, Хатуев Әбүбәкер, бындағы крәçтиән хужалығының яңы хужаһы.

— Бик йылғыр икәнһең! Мин һинең иленде бандформированиеларҙан таҙартып, һуғышып йөрөгәндә, минең ауылыма килеп хужа булғанһың.

Ярандар аяғүрә баçты. Әммә хужа, Искәндәрҙең күҙҙәренә иғтибарлап тағы бер ҡарап ҡуйғас, уның ҡурҡыуҙан күптән үткән, хатта үҙе үлем эҙләгән кеше икәнен төшөнөп өлгөргәйне инде. Ул ярандарын йәнә тыйҙы:

— Барығыҙ, приемныйҙа ултырып тороғоҙ! Бында берәүҙе лә индермәгеҙ!

Ярандар Искәндәргә йоторҙай итеп ҡаранылар ҙа, теләмәй генә кабинеттан сығып киттеләр.

— Претензияғыҙ урынһыҙ, бөтәһе лә законлы рәүештә эшләнде. Бөтөнләй бөлгән колхозығыҙҙы һатыу маҡсатында районда аукцион үткәрелде. Мин унда ҡатнаштым һәм еңдем. Минең был милеккә хоҡуғым регистрация палатаһында теркәлде.

Регпалата хаҡындағы һуңғы һүҙҙәре бик ышаныслы яңғырайманы. Быны һиҙеп, Искәндәр йәнә Хатуевҡа һынсыл ҡараш ташланы.

— Хәҙер бер кем дә, бер нимә лә эшләй алмаясаҡ. Мин хужалыҡты законға ярашлы, хөкүмәт органдарында үҙемә оформить иттем.

— Тикшерербеҙ... — тип һуҙҙы Искәндәр. — Нисек итеп чечен боевигы миллион ярым һумға нисә быуын ауылдаштарыбыҙ 70 йыл тир түккән колхозды эләктергән икән.

Хатуевтың асыуынан йөҙө ағарынып китте:

— Мин боевик түгел, мин тулы хоҡуҡлы Рәсәй Федерацияһы гражданы, — тип ыҫылданы ул, күҙҙәренән йәшен ялтлатып.

Гражданлыҡ тураһында һүҙ сыҡҡас, Искәндәрҙең йөрәге һыҡрап китте, йөҙө һытылды. Был ниндәй ахмаҡлыҡ һуң? Асылда Рәсәйгә ҡаршы бола күтәреп, һуғышып йөрөгән боевик — Рәсәй гражданы, ә ил өсөн өс һуғышта ҡатнашып, орден-миҙалдар менән наградланған яугир офицер гражданин түгел. Тимәк, илһеҙ берәҙәк.

Искәндәр үҙен тынысландырырға тырышты:

— Мин һине таныным. Беренсе Чечен һуғышында боевик инең, — Искәндәр, ысынлап та, уны таныны. — Боевик булыуың мине бик борсомай, һинең кеүектәрҙе күп күрҙем. Ауылдаштарымдың хәләл көсө менән төҙөлгән колхозды буш ҡына хаҡҡа үҙләштергәнһең. Ике йөҙ баш һыйыр үҙе генә лә дүрт миллион һум тора бит! Арифметиканы насар беләһеңме, йәки, киреһенсә, артыҡ аҡыллыһыңмы?

Хатуев та үҙен ҡулға алып өлгөргәйне:

— Рәсәй армияһы илемде баҫып ингән йылда сельхозакадемияны, уның аспирантураһын тамамлап, тыуған ауылыма эшкә ҡайтҡайным. Яңы йыл ҡаршылаған шатлыҡлы төндә республикабыҙҙы бомбаға тоттолар. Аҙаҡ ауылымды танкылар ер менән тигеҙләне. Әйткәндәй, беҙҙең хужалыҡ күпкә байыраҡ ине. Мин — экономист, нимәлер һатып алам икән, үҙемә табышлы итеп алырға тейешмен. Был — бизнестың төп законы. Элекке рәйестәрегеҙҙең йүнһеҙлеге арҡаһында колхозығыҙ бөлөп бөткәйне. Мин алмаһам, бөтөнләй емерелә ине. Һыйыр, сусҡа фермалары, йәйге лагеры, МТМ, АВМ, гараждар — бомбаға тотолғандан ҡалған кеүек инеләр бит. Тотош һүтеп алып бөткәйнеләр. Танкылар ҙа кәрәкмәй. Биш-алты тракторҙы металлоломға тапшырғандар. Хужалыҡты арзанға алған да байыған, тип уйлайһыңмы? Был бөлгән колхозды тергеҙер өсөн кәмендә 15 миллион һум һалырға кәрәк. Сәсеүгә 6 миллион түктем инде, ә уңыш алып булырмы, Алла ғына белә... Хөкүмәттән ярҙам юҡ.

— Һин бит экономист, табышһыҙ ҡалмаҫһың... Ергә приватизация законы ғәмәлгә ингәс, колхозсыларҙың пайҙарын да гектарына берәй ярты биреп алып бөтөрһөң...

— Элек башҡорттар ерҙәрен бер әсмуха сәйгә лә алыштырған. Хәҙер бер яртыға һатһалар, айырма ҙур булмаҫ, — Хатуев мыҫҡыллы йылмайҙы. Искәндәрҙең йөҙө буҙарынып китте. Хатуевҡа пистолет прицелы аша ҡарағандай төбәлде. Эх, ошонда уҡ атып йығыр инем дошманды, тигән уй башынан үтте, йоҙроҡтары йомарланды. Хужа уның кәйефен аңланы, әлбиттә, ҡәнәғәт йылмайып һүҙен дауам итте:

— Уларҙың ерҙәрен ирекһеҙләп алырға йыйынмайым. Хаҡтарҙы баҙар билдәләйәсәк. Кемдең аҡсаһы бар, шул аласаҡ. Теләһәң, әйҙә, һин һатып ал ата-бабаң ерҙәрен. Ғөмүмән, минең экономик анализым буйынса, әле Рәсәйҙә нормаль капитализм төҙөлөп бөтмәйенсә, ауыл хужалығы ерҙәре хаҡы үтә түбән буласаҡ. Бер ун биш-егерме йылдан һуң, әлбиттә, уға ысын хаҡ бирәсәктәр.

— Ун биш-егерме йылдан һуң үҙ еребеҙҙе үҙебеҙгә ҡыйбат хаҡҡа һатып китергә уйлайһыңмы?

— Эх... Ауылдаштарыңа күҙеңде асыбыраҡ ҡара! Эскелек, иманһыҙлыҡ, боҙоҡлоҡҡа батҡандар бит! Мосолман ҡанундарын, милли традицияларҙы онотҡандар. Олоно — оло, кесене — кесе, ирҙе — ир, ҡатынды ҡатын итә белмәйҙәр. Мин бында саҡта ғына күпме кеше эсеп үлде! Ауылда мулла булып йөрөгән бабайҙы әбейе сүкеш менән башына һуғып үлтерҙе. Оялышыбыҙҙан, эскән баштан үҙе йығылған тип ҡағыҙға теркәттек. Был бит башҡа һыймаҫлыҡ эш! Һин әйтәһең, ауылдаштарың ун биш-егерме йылдан һуң ерҙе ҡыйбатҡа алырҙар, йәнәһе. Улар бит, бөтә ауыл менән йыйылышып, мин алған хаҡҡа ла колхоздарын ала алманы.

— Ҡайҙан улар шул тиклем аҡса тапһын, ун йылдан артыҡ эш хаҡы күргәндәре юҡ! — Искәндәр ауылдаштарын яҡларға тырышты.

— Халҡығыҙ бик ярлы. Ауылда ғына түгел, ҡалала йәшәүсе башҡорттар араһында ла бай кешеләр юҡ кимәлдә. Халҡығыҙҙы берләштерерлек, ауыр саҡтарҙа терәк булырлыҡ урта класығыҙ, милли буржуазияғыҙ юҡ...

— Олатайымдың атаһы Арыҫланов Солтан бай аслыҡ йылдарында тирә-яҡ халыҡҡа бишәр мең бот ашлыҡ тараҡан. Бушлай... — тип, өләсәһенең һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө Искәндәр.

— Тимәк, элек булғандар башҡорт байҙары, әле юҡ. Шуға күрә халҡығыҙ тарҡау, бер-береһен күрә алмай, хөсөт, ошаҡ йөрөтә.

— Һин минең халҡымды юҡҡа сығарырға тырышма! Чечендар Шамил имам етәкселегендә Рәсәйгә ҡаршы илле йыл тирәһе һуғышһа, башҡорттар ике йөҙ йылдан ашыу һуғышҡан!

Хатуев йәнләнеп китте:

— Ата-бабаларығыҙ азатлыҡ даулап Рәсәйгә ҡаршы ике йөҙ йылдан артыҡ һуғышҡан, ә һин, уларҙың вариҫы, урыҫтарға эйәреп, үҙ мосолмандарыңа ҡаршы һуғышып йөрөгәнһең!

Искәндәр ҡапылғара ни тип яуапларға белмәй өнһөҙ ҡалды. Эйе, был Хатуев ябай кеше түгел икән. Белемле, аҡыллы, ғөмүмән, бик етди дошман. Искәндәр, асыуын йүгәнләп, Хатуевка хөрмәт менән ҡарап ҡуйҙы. Дөрөҫөн әйткәндә, ул чечен халҡын яҡшы белә ине. Уларҙың батырлығы, берҙәмлеге, дини вә милли традицияларын һаҡлай белеүҙәренә һоҡлана торғайны.

Заманында уларҙан да ғәйрәтлерәк булған беҙҙең халыҡ ни арала шул тиклем түбәнселеккә тәгәрәгән һуң? Әле егерменсе быуат башында ғына бөтә Рәсәй киңлектәрендә милли үҙаң, сәйәси активлыҡ буйынса башҡортҡа тиңләшерлек халыҡ булмаған бит... 1917 йылда башҡорттар өс ҡоролтай үткәреп, хөкүмәт, ғәскәр төҙөгән осорҙа бөтә Кавказда шылт иткән тауыш та сыҡмаған. Әле, киреһенсә, Кавказ

тамуҡ утындағы ҡаҙан кеүек ҡайнай, ә бында халыҡ эсеп үлеп бөтөп бара.

Хатуев яуап көтөп, Искәндәрҙән ҡарашын алманы. Әле уның күҙҙәрендә, дошманлыҡтан башҡа, ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныу сатҡылары ла шәйләнә ине.

— Мин, Рәсәй армияһы офицеры, тоғролоҡҡа ант иткәнмен. Шуға күрә мине ҡайҙа ебәрһәләр — шунда һуғыштым! Ата-бабаларым да казачий офицерҙар сифатында Рәсәй өсөн һуғышҡандар. Кәрәк саҡта, башҡорт восстаниеларында ла ҡатнашҡандар, — тип ғорур яуапланы Искәндәр, ниһайәт. Был һүҙҙәрҙән һуң Хатуевҡа ҡарап:

— Ә һин всё-таки тәүге һуғышта боевик инең, — тип өҫтәне.

— Ярай, әгәр һиңә оҡшай икән, мине боевик тип ата. Ә ул саҡта мин, мирный чечен булһам да, тыуған еремде, ауылымды, ғаиләмде, ҡартайған ата-әсәмде баҫҡынсыларҙан һаҡланым. Һинең боронғо ата-бабаларың кеүек. Үҙеңде минең урынға ҡуйып ҡара: бына ауылыңа танкылар баҫып инеп, тыуған йортоңдо ер менән тигеҙләй башлаһа, һин ни эшләр инең?

Искәндәр һорауға һорау менән яуапланы:

— Ярай, мин һинең ул саҡтағы хәлеңде аңланым, ти. Ә әле һин минең ауылымда ни эшләйһең? Беҙҙең колхозды ниндәй маҡсат менән һатып алдың?

Хатуев йылмайғандай итте:

— Маҡсаттар изге, улар хаҡында колхоздың тәүге дөйөм йыйылышында ентекләп һөйләнем инде. Беренсенән, беҙ һеҙҙең ауылға капитал, инвестициялар һалабыҙ һәм хужалыҡты күтәрәсәкбеҙ. Хужалыҡ аяҡҡа баҫһа — халыҡ эш хаҡы аласаҡ, һәйбәт йәшәйәсәк. Игенселектән тыш, малсылыҡты үҫтерәсәкбеҙ. Ҙур булмаған һөт комбинаты, ит эшкәртеү цехы төҙөп, һатыуға әҙер продукция сығарасаҡбыҙ. Ҡымыҙ хужалығы буласаҡ, сөнки ҡымыҙ һөттән дүрт тапҡыр ҡыйбатыраҡ.

Ауылдан йыраҡ булмаған мүкле күлдең батҡағы сәләмәтлеккә ныҡ файҙалы икән, уның ярында ҙур булмаған санаторий төҙөтәсәкбеҙ. Тауҙарығыҙ төҫлө таштарға бай, уларҙы эшкәртеү производствоһы ҡуйырға планлаштырабыҙ. Урмандарығыҙ тураһында әйтеп тә тормайым... Бында мөмкинлектәр үтә киң. Ғөмүмән, ерегеҙ иҫ китмәле бай, баҫҡан һайын хазина. Бында күп нәмәләр эшләргә була. Әйткәндәй, академиянан һуң аспирантурала уҡыған сағымда диссертация яҙа башлағайным. — Хатуев асып ҡуйылған ноутбук төймәләренә баҫҡыланы ла, экрандан уҡыны: “Пути восстановления и дальнейшего развития экономики сельского хозяйства России посредством создания народных аграрных предприятий в условиях рыночных отношений”. Диссертацияны теүәлләргә һуғыш ҡамасаулағайны. Хәҙер теорияны практика менән тулыландырып, фәнни эшемде гөрләтеп алып барырға була бында.

Искәндәр һаман үҙенекен ҡайырҙы:

— Инвестицияларығыҙҙы бүтән илгә, мәҫәлән, Чечняға һалып булмаймы ни?

— Унда Рәсәй һала... — Хатуев мәғәнәле йылмайҙы. — Чечняла бизнес хәүефлерәк, ә бында тыныс, Мәскәү, Санкт-Петербург, Тольят-

ти кеүек ҙур ҡалаларға беҙҙең халыҡтың капиталы күп һалынды. Ә әле тәжрибә рәүешендә ергә аҡса һалып ҡарарға булдыҡ. Тик нимә килеп сығыр... Мине бер нәмә борсой: халыҡ ныҡлы боҙолоп өлгөргән, уны әҙәм рәүешенә индереп, эшләтеп булырмы?

— Яҡшы түләһәң, эшләрҙәр, — тип яуапланы Искәндәр. Һәм, бераулыҡ уйланып ултырғас, былай тип әңгәмәне йомғаҡланы:

— Һөйләүен былай шыма һөйләйһең. Тик мин күптән инде ҡоро һүҙҙәргә ышаныу йәшенән үткәнмен. Ниәттәрең ысынлап та изгеме икән һуң? Ҡыҫҡаһы, үпкәләмә, колхозды алыуыңдың законлылығын тикшерәм. — Искәндәр хушлашмайынса кабинеттан тышҡа атланы. Урамға сыҡҡас, уйға ҡалды. Эйе, был чечен ябай кеше түгел. Нисегерәк эләктерҙе? “Ата-бабаларың азатлыҡ даулап Рәсәйгә ҡаршы ике йөҙ йылдан артыҡ һуғышҡан, ә һин, уларҙың вариҫы, урыҫтарға эйәреп, үҙ мосолмандарыңа ҡаршы һуғышып йөрөгәнһең”.

Искәндәр башһыҙ солдафон түгел. Ул күптән уйлана башлағайны был хаҡта. Тәүҙә Афғанда, аҙаҡ Чечняла. Улар ни бысағыма был ер аяғы, ер башында ятҡан сит-ят илдәрҙә ҡан түгә әле? Алып барған һуғыштары хаҡмы, нахаҡмы? Ғөмүмән, уйлап ҡараһаң, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: әгәр ҙә бер нисә кеше һуғышып китеп, берәйһе йәрәхәтләнһә — был енәйәт, бының өсөн төрмәгә ултырталар. Ә батшалар йөҙәрләгән миллион ҡорбандар килтереүсе бөтә донъя кимәлендәге ҡырылыш ҡуптарһа — был Тыуған ил мәнфәғәттәре өсөн алып барылған изге һуғыш тип атала һәм уның өсөн орден-миҙалдар бирәләр...

Боронғо замандарҙа былай буталсыҡ булмаған. Бына дошман, ул һинең ереңде баҫып алырға килгән. Тыуған ерҙе һаҡлап һуғышырға бурыслың. Ә бына Хатуев та колхозды алған, ерҙе ҡулына төшөрөргә лә уйы бар. Ул дошманмы? Әллә, үҙе әйтмешләй, изге ниәтле, тулы хоҡуҡлы Рәсәй гражданинымы? Закондар бит уға колхозды алырға ирек биргән...

Ә ни өсөн ауылдаштар, йәиһә үҙебеҙҙең халыҡ вәкилдәре колхозды алмаған? Аҡсалары юҡ. Тимәк, беҙ — ярлы халыҡ? Шул тиклем бай Башҡортостанда йәшәгән төп халыҡ ни өсөн ярлы һуң? Рәсәй ауылдары халҡы бөтөнләй хәйерселектә көн итә. Унда бер ни ҡалмаған, бөтә нәмә емерелгән. Рәсәйҙә кем һәйбәт йәшәй һуң? Кому на Руси жить хорошо?

Искәндәр ауыл хакимиәте башлығына инеп сығырға булды. Колхоз һатылыуы мәсьәләһенә ул нисек ҡарай икән. Үҙенән бер йәшкә генә кесерәк был кеше менән мөнәсәбәттәре ҡатмарлы ине. Үҫмер, йәш саҡтарында Искәндәрҙән эләккеләй торғайны уға. Сәйерерәк әҙәм шул Ғаян. Мәктәптә яҡшы уҡыны, активист булды. Ауыл хужалығы институтын тамамлаған, һәйбәт, көслө белгес, тиҙәр. Әммә холҡо... һауалы, үтә ҡоро, кеше менән йүнләп һөйләшмәй. Шул уҡ ваҡытта өҫтәгеләргә ярай белә. Ҡыҫҡаһы, бөтә булмышы менән бюрократ.

Ғаян урынында ине. Искәндәрҙе ул битараф йөҙ менән ҡаршыланы. Йөҙөнә, исмаһам, йылмайыу әҫәре лә сығарманы. Әйтерһең, күрешмәгәндәренә тиҫтәләрсә йылдар үтмәгән. Һалҡын ғына иҫәнләшкәс, Ғаян һорау бирҙе:

— Тыңлайым, ни йомош? — Үҙе эшлекле ҡиәфәттә ҡағыҙҙарын ҡыштырҙатты.

Искәндәрҙең һарыуы ҡайнаны. Һиңә тел әрәм итеүҙән фәтүә булырмы икән, тип уйланы, шулай ҙа һорауын бирҙе:

— Хатуевтың колхозды һатып алыуы законлымы?

Ғаян, үҙенең ғәҙәтенсә, һорауға яуап бирмәне, мыҫҡыллы йылмайып ҡына ҡуйҙы. Искәндәр асыуланып һорауын ҡабатлағас, ул һуҡ бармағын өҫкә төбәне:

— Район хакимиәтенә барып һораш.

Искәндәр уға тишеп ҡараны ла, сығырға ҡуҙғалғайны, Ғаян уны һорау менән туҡтатты:

— Беҙгә оҙаҡҡамы?

Искәндәр түрәгә сәйерһенеп баҡты:

— Мин тыуған ауылыма йәшәргә ҡайттым.

Ғаян ҡулын һуҙҙы:

— Паспорт һәм башҡа документтарыңды бир, теркәргә кәрәк.

Искәндәр түрә йоратына ашарҙай булып ҡараны. Ну был бюрократтарҙы... Ҡайҙа барһаң да, паспорт таптыралар! Паспорт юҡлығын әллә ҡайҙан һиҙәләрме ни...

— Документтар менән һуңғараҡ килермен, әлегә ваҡыт тар, — тине лә Искәндәр, ишекте дөңкөлдәтә ябып, кабинеттан сығып китте.

Бер ҡыҙғанда ҡалаға, район хакимиәтенә барып ҡайтырға булды. Бәлки, унда һорауҙарына яуап таба алыр. Военкоматҡа инеп, теркәлергә лә кәрәк. Ауыл осонда биш минут та торманы, эргәһенә иҫкерәк “Жигули” килеп туҡтаны. Абайлабыраҡ ҡараһа — руль артында Ришат дуҫы ауыҙ йырып ултыра. Төҫ-башҡа тиҫтерҙәре араһынан Ришат ҡына бирешмәгән икән. Мәктәп эштәре менән район үҙәгенә китеп барыуы. Хәл-әхүәл һорашҡас, Искәндәр дуҫына үҙен борсоған һорауҙарҙы теҙҙе:

— Хатуев колхозды законлы рәүештә алдымы, үҙе ниндәйерәк кеше? Был эшкә нисек ҡарайһың?

Ришат, бер аҙ уйланғандан һуң, яуап бирҙе:

— Законһыҙ алһа, сәсеүгә ул тиклем аҡса түкмәҫ ине. Мин уны сәсеп тә тормаҫ, колхоз мөлкәтен өлөшләп шунда уҡ һатып бөтөр тигәйнем.

Искәндәр уға ғәжәпләнеберәк ҡараны.

— Маҡсаты ябай спекуляция булһа — тиҙ арала ҙур куш эләктерер өсөн был иң ябай юл бит инде, — тип аңлатты уға Ришат. — Иҫәпләп ҡара: колхозды бөтә мөлкәте менән миллион ярымға алды. Хәҙер ликвидный, тиҙ һатыла торған мөлкәтте иҫәпләйек: ике йөҙ баш һыйыр — дүрт миллион булһын, ҡырҡ ике берәмек техника — өс миллион тирәһе, тирмән, пилорама, ашлыҡ, мал аҙығы, ҡалған ваҡтөйәк — йәнә бер миллион. Биналарҙы тиҙ генә һатып булмай бит инде. Һөҙөмтәлә — ликвидный мөлкәт кенә һигеҙ миллионлыҡ. Унан миллион ярым расходын алһаҡ — алты миллион ярым саф табыш ҡала.

— Әһә-ә, хөрт түгел, — тип һуҙҙы Искәндәр.

— Ләкин иң ҡыҙығы шул: яңы хужа колхоз мөлкәтен һатып ҡасманы. Сәсеү үткәрҙе, хужалыҡта тәртип урынлаштырҙы, хатта колхоз-

сыларға бер нисә айға эш хаҡы түләне. Мәктәпкә ярҙам итә (элекке рәйес мәктәпте бөтөнләй хәстәрләмәй ине). Көҙгә мәсет төҙөтөп, ауылға мулла килтерәм, ти.

Искәндәр аптырап ҡалды:

— Ваһһабит мулла килтермәҫме икән?

— Кем белә инде. Ҡыҫҡаһы, мин был Хатуевты әлегә раскусить итә алманым, һәр хәлдә, көн һайын тиерлек беҙгә телеэкрандан күрһәткән башкиҫәр чечендарға оҡшамаған: белемле, аҡыллы, хатта интеллигент, етмәһә, ауыл хужалығы темаһына диссертация яҙа икән. Шуға ҡарамаҫтан, бик талапсан, ә ярҙамсылары ҡырағайыраҡ, эшкә эсеп килеүсе колхозсыларға ҡул күтәрәләр, ти.

Ришат бер аҙ тын торҙо ла дауам итте:

— Әлбиттә, ғәрлекле... Колхозды ауыл халҡы йыйылышып, йәиһә үҙебеҙҙең башҡорт байы алһа, һәйбәтерәк булыр ине. Тик ҡайҙан табаһың инде булмаған башҡорт байҙарын? Йүнлерәк фермерҙар ҙа үҫтерә алманылар. Ултырып йөрөргә машиналары ла юҡ, сабаталы фермерҙар... Хужалыҡтар бөлөп, колхозсыларҙы эш менән тәьмин итеп, әҙәми йәшәү шарттары булдыра алмаған, ауыл халҡы боҙолоп, деградировать итеп бөтөп бара. Ниндәй йомшаҡ климатлы Европала, йылына икешәр уңыш йыйған Америкала ауыл хужалығы хөкүмәт дотацияһында ултыра. Уларҙың нормативтары буйынса һәр колхозыбыҙ йыл һайын ун биш-егерме миллион һум дотация алырға тейеш.

— Улай булһа, колхоздар йырлап эшләрҙәр ине, ауылдар көрсөктән сығыр ине, — тип әйтеп ҡуйҙы Искәндәр.

— Шулай булырға тейеш! — Ришат ныҡлы инанған төҫ менән һүҙен дауам итте. — Башҡорт халҡының һикһән проценты ауылдарҙа йәшәй. Әгәр ҙә башҡорттарҙы үлемдән һаҡлап алып ҡалырға теләһәләр — ауылды тергеҙергә кәрәк. Сөнки башҡорт нәҡ ауылда ғына башҡорт булып һаҡлана ала. Ауылдарҙа әҙәмсә шарттар, эш урындары, мәҙәниәт усаҡтары, иман индерер өсөн мәсеттәр, фермер хужалыҡтары һәм башҡа стимулдар булдырыу фарыз. Халҡыбыҙҙың элитаһы: интеллигенция, мәҙәниәт оҫталары, етәксе кадрҙар — барыһы ла тиерлек ауылдан сыҡҡан. Халҡы боҙолоп бөтөп, деградацияланһа, киләһе быуындар элитаһын, яңы таланттарҙы, шәхестәрҙе ауыл тыуҙыра алырмы? Халыҡтың кимәлен талантлы шәхестәр билдәләй. Бөйөк шәхестәре булған халыҡ ҡына бөйөк була ала. Ҡыҫҡаһы, ауыл бөтһә — башҡорт бөтә, башҡорт бөтһә — Башҡортостан юҡҡа сыға.

— Хәлдәр шулай уҡ икән, — тине Искәндәр.

— Нисәмә йыл милли көрәш секцияһы алып барам, әле көрәштерергә малайҙар юҡ! Мәктәптә бейеү ансамблендә егеттәр юҡ! Аптырағас, ҡыҙҙарға ирҙәр кейеме кейҙереп, «парлаштырып» бейетәбеҙ. Беҙ үҫкәндә мәктәптә дүрт йөҙ уҡыусы инек. Әле һикһәнгә ҡалды. Быйыл беренсе синыф булмаясаҡ, уҡырға төшөргә бер бөртөк бала ла юҡ, — тине Ришат әсенеп.

— Дә-ә, донъялар былай барһа, башҡортҡа ғына түгел, урыҫҡа ла ҡороу янай, — тип, дуҫының һүҙҙәрен ҡеүәтләне Искәндәр. — Ҡайҙалыр уҡығайным, Рәсәй халҡы йыл һайын почти бер миллионға кәмей,

тип. Имеш, ғалимдар прогнозы буйынса, тағы ун йылдан һуң Рәсәй халҡы йөҙ ун миллионға ғына ҡаласаҡ, тип.

— Бәлки, киреһенсә, бер-ике йөҙ миллионға етер, — тип, уны йәнә аптыратты Ришат.

— Нисек итеп?

— Физика законына буйһоноп: пространство не терпит пустоты. Бушаған ерҙәр кем менәндер тулырға тейеш бит инде. Мәҫәлән, Алыҫ Көнсығышҡа, Приморье крайына ҡытайҙар туласаҡ. Рәсәй баҙарҙарын вьетнам, әзербайжан, Урта Азия халыҡтары күптән баҫып алды. Улар бында мәңгегә төпләнәсәк. Беҙҙә хәҙер кавказ халыҡтары вәкилдәренең икенсе быуындары үҫеп етте. Улар ҙа илдәренә ҡайтмаясаҡ. Образлы итеп әйткәндә, Рәсәй власының үҙ халыҡтарына ҡарата алып барған сәйәсәтен былай тип күҙ алдына килтерергә була: эскелектән аҡылын һәм намыҫын юйған әсә, аҡсаһын араҡыға бөтөрөп, балаларын ҡарамайынса астан үлтерә. Улар урынына өйөнә әрһеҙ үгәй балалар килеп тула.

Дуҫының был сағыштырыуынан Искәндәр көлөмһөрәп ҡуйҙы. Быны шәйләгән Ришат ҡыҙып-ҡыҙып дауам итте:

— Күпселек халыҡты хәйерселеккә дусар итеү, крәҫтиән хужалыҡтарын, ауылдарҙы емереү — үҙ балаларыңды ҡарамайынса асҡа үлтереү булмаймы ни? Рәсәй ауылдарына ҡарата алып барылған был сәйәсәт — Рәсәй халыҡтарына ҡаршы ҡылынған оло енәйәт, хатта геноцид ул! Сөнки Рәсәй халҡының йөрәге, рухы — ауылда. Тыуған ер халыҡҡа аҙыҡ-түлек кенә түгел, рухи таяныс, көс бирә, күңелен таҙарта. Ауылдарҙы бөтөнләй емереп бөтһәләр — халыҡ тамырҙары ҡороған ағас һымаҡ ҡаласаҡ.

— Был һүҙҙәрең менән ризалашам, мин үҙем шул рухи таяныс эҙләп ауылыма ҡайттым бит инде, — тине Искәндәр.

— Ә донъя баҙарында ниндәй ситуация бит: бер баррель нефть хаҡы етмеш долларҙан артты. Хәҙер нисә йыл инде Рәсәйгә уникаль шанс бирелә — әйҙә, байы, иҡтисадты күтәр! Нефтедолларҙар быуа быуырлыҡ. Ә беҙҙең аҡыллы баш экономистар, наҙан ауыл бисәләре кеүек, аҡсаларҙы стабфонд-ойоҡбаштарына тултыралар. Стабилизация фонды инфляция арҡаһында былтыр ғына ике миллиард долларға кәмегән. Ә аҡсалар бит эшләргә тейеш!

— Ә һин нефтедолларҙарҙы ҡайҙа йүнәлтер инең? — тип йылмайҙы Искәндәр.

Дуҫы теҙеп китте:

— Иң тәүҙә ауыл хужалығын, ауылды тергеҙергә кәрәк. Ауылға капитал һалыу ул халыҡҡа һалыу була. Минеңсә, Рәсәйҙең кире терелеүе ер, ауыл менән бәйле; икенсенән, кисектермәйенсә демографик ситуацияны хәл итергә кәрәк. Бының өсөн ғәҙәттән тыш йәштәр программаһы төҙөү фарыз. Бай, түрә-ғара балаһы булмаған күпселек йәштәрҙең тормошта перспективалары юҡ бит. Юғары уҡыу йорттарында белем алыу күпселек осраҡта түләүле. Уҡып бөтһә — эш юҡ. Ғаилә ҡорам тиһә — торлаҡ юҡ. Ҡыҫҡаһы, йәштәргә бушлай юғары белем, эш урындары, лайыҡлы эш хаҡы һәм торлаҡ; өсөнсөнән, япондарҙың иң алдынғы технологияларын һатып алып, заманса заводтар төҙөргә кәрәк.

Был беҙгә бихисап эш урындары бирәсәк. Хәҙер нисә йыл “Ваҡыт” программаһын ҡарайым. Исмаһам, Рәсәйҙә һыңар бер завод төҙөп, эшләтеп ебәрҙек, тип күрһәтһендәр ине. Тимәк, төҙөлмәй. Әйтергә кәрәк, Башҡортостанда төҙөлә: бер нисә йыл элек стабилизаторҙар етештереү заводы, быяла заводы, ҡоро төҙөлөш ҡатнашмалары производствоһы сафҡа индерелеп, эшләтеп ебәрелде. Дүртенсенән, ҡайһы өлкәлә көслөбөҙ, шул йүнәлеште үҫтерергә кәрәк. Мәҫәлән, космос сәнәғәтен, атом энергетикаһын, самолеттар, ракеталар төҙөүҙе, һатыуға ҡорал етештереүҙе һ.б. Ә бына нәмә эшләй белмәйбеҙ — мәҫәлән, еңел автомобилдәр производствоһын — ул заводтарҙы япон, немецтарға һатырға кәрәк; бишенсенән, әлбиттә, фән, мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәләренә иғтибарҙы арттырырға һәм, ниһайәт, беспризорниктар проблемаһын хәл итергә кәрәк. Оят бит, уларҙың һаны бер нисә миллионға еткән. Сара күрелмәһә, улар биш-ун йыл эсендә енәйәтселәр армияһына әүереләсәк; алтынсынан, илдә эштәр алға барһын өсөн, ниһайәт, законлылыҡты нығытыу фарыз. Әтеү, бөтә илде бардакка әйләндерҙеләр. Ғөмүмән, эште ошонан башларға кәрәк, һәм беренсе нәүбәттә чиновник-бюрократтарҙы ауыҙлыҡларға ваҡыт. Юғиһә, олигархик капитализмды бюрократик капитализмға әйләндерҙеләр ҙә, ни теләйҙәр, шуны ҡылалар, ил үҫешенә тормоз булып ултыралар, һәм иң аяныслыһы: чем выше чиновник-бюрократ, тем опаснее он для государства!

— Дөрөҫ әйтәһең, бюрократтар халыҡ дошмандарына әүерелгәнгә күрә бит инде нисә быуын тир түккән колхозыбыҙҙы ете ят чеченға һатҡандар! Яйлап еребеҙҙе лә ҡулына төшөрөр әле ул.

— Йөҙ ҡырҡ гектар иң уңдырышлы ерҙәрҙе Хатуев алды инде, — тип аптыратты уны Ришат.

— Нисек алды?!

— Закондарға таянып. Ғаян унын нәҫел-ырыуын, ярандарын ауылға пропискаға алып, ер пайҙары бүлеү исемлегенә индерҙе. Ауыл сходы был исемлекте раҫланы һәм шуның менән эш тә бөттө.

— Ҡаршылар булманымы ни?

— Колхоз хужаһына кем ҡаршы әйтһен. Бер мин генә: “Был законға яраҡлы эшме?” — тип шик белдергәйнем, колхозыбыҙҙы совет замаһында ла, унан һуң да “һауып” өйрәнгән ялағай Вәлийән, агент Минәхмәт, донос Бибиниса ҡысҡырышып сыҡтылар. Имеш, ул хужа, уға ер тейеш, биш мең гектар һөрөнтө еребеҙ бар, кәмемәҫ. Шулай булғас, нишләтәһең инде.

Асыуынан ағарынып, бер килке өнһөҙ барған Искәндәр янаулы тауыш менән әйтте:

— Ярай, ярай, ничего... Мин ул недобитый чечен боевигын на чистую воду выведу! — Шунан Ришатҡа ҡарап серле ҡиәфәттә өҫтәп ҡуйҙы. — Район хакимиәтенә, регпалатаға барып, колхозды нисек һатып алыуын тикшертәм!

— Ай-һай, ҡарға күҙен ҡарға суҡырмы икән? Хатуев унда үҙенә кәрәк түрәләрҙе һатып алып бөткәндер инде. Әйткәндәй, бөгөн иртәнге нарядта мин дә булдым, мәктәпкә ярҙам һорап барғайным. Хатуев унда һинең хаҡта бер нисә һүҙ әйтте: “Ауылға Чечен һуғышынан герой-

орденоносец майор Арыҫланов ҡайтҡан, минең колхозды алыуыма ҡаршы, сделканы тикшертәм, тине". Был һүҙҙәрҙән һуң ялағай Вәлийән менән агент Минәхмәттең ҡайһылай ҡуштанланып һикереп сыҡҡанын күрһәң икән...

— Үәт, ҡәбәхәттәр! — тип ыҫылданы Искәндәр.

Ришат ауыр итеп көрһөнөп ҡуйҙы:

— Эх, Искәндәр дуҫ, бәлә чечен Хатуевта түгел бит, бәлә үҙебеҙҙә...

Оҙаҡламай ҡалаға килеп еттеләр. Искәндәр район хакимиәте бинаһы эргәһендә төшөп ҡалды. Район башлығы урынында юҡ ине, Өфөгә кәңәшмәгә киткән икән. Милек буйынса уның урынбаҫары Сатканов әфәндегә инә алды. Ләкин һөйләшеүҙән фәтүә сыҡманы. Был түрә лә шул уҡ балыҡ башын сәйнәне, имеш, бөтәһе лә законлы, һүҙ аҙағында ул да Искәндәрҙән документтарын таптырҙы, уңайһыҙ һорауҙар яуҙырҙы: "Һеҙ кем? Паспортығыҙҙы күрһәтегеҙ! Һеҙ гражданин да түгел, ә шундай эшкә ҡыҫылаһығыҙ..."

Кәйефе ныҡ ҡырылған Искәндәр, урамда бер аҙ тапанып торғандан һуң, регпалатаға ла инергә булды. Бында ла уны ҡосаҡ йәйеп ҡаршыламанылар. Шулай уҡ паспорты менән ҡыҙыҡһынғандан һуң, учреждение начальнигы Жидкова, урта йәштәрҙәге һылыу ғына ҡатын, теҙеп китте:

— Һеҙ ҡыҙыҡһынған һорау — ябыҡ информация. Милиция, прокуратура, ФСБ органдарына ғына беҙ был һорауға яуап бирә алабыҙ. Рәсми запрос буйынса. Ә ғөмүмән, беҙҙең ил — интернациональ, хоҡуҡи дәүләт. Беҙҙә милләт айырыу юҡ, бөтә милләттәр ҙә тиң хоҡуҡлы. Чечендар, тулы хоҡуҡлы Рәсәй граждандары булараҡ, илдең теләһә ниндәй мөйөшөндә лә милек һатып алырға хаҡлылар. Улар ғына түгел, хатта сит ил граждандары ла Рәсәйҙә милек һатып алырға хоҡуҡлы.

— Шулаймы ни... — Искәндәр мыҫҡыллы йылмайҙы. — Тимәк, илде тотош һатып бөтөрәсәкһегеҙ икән. Ә беҙҙең хужалыҡ буйынса мин һеҙҙе асыҡтан-асыҡ иҫкәртергә тейеш: был эште былай ғына ҡалдырмаясаҡмын! Республика прокуратураһына, Президентҡа яҙасаҡмын! Ауыл халҡын күтәрәм! — Искәндәр ишекте шап итеп ябып сығып китте.

Ул арала Жидкова кеҫә телефонының төймәләренә баҫҡыланы:

— Алло! Әбүбәкер Исаевич, һаумыһығыҙ, регпалатанан Жидкова борсой. Миндә Чечен һуғышы ветераны майор Арыҫланов булып китте, һеҙҙең сделка буйынса. Прокуратураға, Президентка ялыу яҙыу менән янай, ауыл халҡын күтәрәм, ти. Ҡыҫҡаһы, ялыуҙар, тауыш-тын булмаһын ине. Проблемағыҙҙы ғауғаһыҙ ғына хәл итегеҙ. Ярай, хушығыҙ, уңыштар теләйем.

Хатуев уйға ҡалды. Ярты сәғәт элек кенә уға район хакимиәте башлығының милек буйынса урынбаҫары Сатканов шылтыратып, Искәндәр тураһында киҫәткәйне. Эйе, был аҡһаҡ майор уға артыҡ күп мәшәҡәттәр тыуҙырмаҡсы. Ни эшләргә?

Ә Искәндәр паспорт-виза хеҙмәтенә инеп, гражданлыҡ биреүҙәрен һорап, ғариза яҙҙы. Ҡағыҙын тапшырғанда шундағы ҙур ҡорһаҡлы капитанға һорау бирҙе:

— Гражданлыҡты ҡасаныраҡ бирерһегеҙ икән?

Капитан уға мыҫҡыллы йылмайып ҡарап ҡуйҙы:

— Ашыҡмағыҙ, мин бында анһат ҡына гражданлыҡ таратып ултырмайым, — тип тупаҫ яуап ҡайтарҙы.

Искәндәрҙең йөҙө гөлт итеп янып киткәндәй булды, күҙҙәре асыулы емелдәне:

— Ну, һин, тыл крысаһы, мин һиңә аныҡ һорау бирҙем! Яуап көтәм, — тип екерҙе.

Быҙдай мөғәләмәгә күнекмәгән, шул тиклем зәһәрле ҡараштан ныҡлы ҡаушап ҡалған капитан бер аҙ ыҡ-мыҡ иткәндән һуң, ниһайәт:

— Яҡынса биш-алты йыл үтер, — тип яуапланы. Тауышы ҡалтырап сыҡты, бит алмалары дерелдәп ҡуйҙы.

— Биш-алты йыл?! Нәмә, унда бөтөнләй аҡылдан яҙғандармы әллә?! — Искәндәр һуҡ бармағын өҫкә төртөп күрһәтте.

— Гражданлыҡ биреү мәсьәләһе — етди эш. Закондар ҡаты, бөтә процедураларҙы ла үтергә кәрәк. Миграция хәлдәрен беләһегеҙ бит, Рәсәйгә күпме ҡытайҙар, вьетнамдар, кавказлылар, Урта Азия кешеләре уҡтала... — Капитан бер аҙ тынысланa төштө.

— Нәмә, мин ҡытайға, әрмәнгә, йәки үзбәккә оҡшағанмы? Бәлки, мине монгол шпионы, тип уйлайһыңдыр? Мин башҡорт, ошо район ауылында тыуып үҫкәнмен, әле йәшәргә ҡайттым!

Капитан ағарынып китте:

— Тынысланығыҙ, тынысланығыҙ! Сабыр итеп көтһәгеҙ, гражданство булыр.

— Эх, был һөрһөгән бюрократия, Рәсәйҙе бөтөнләй бөлдөрә икән! — Искәндәр был һүҙҙәрҙе әсенеп әйтте лә урамға уҡталды.

Көнө буйы кабинеттан-кабинетҡа йөрөп аяғына көс төшкән. Ул ныҡ итеп аҡһай-аҡһай, урамдағы эскәмйәгә барып ултырҙы. Тәмәке тоҡандырҙы ла, ауыр уйҙарға батты. Ришат дөрөҫ әйтә икән, бюрократтар ныҡлы шашынған. Үҙҙәренә килеүселәрҙе ҡайһылай күрә алмаусан ҡиәфәттә ҡаршылайҙар, кешеләргә шул тиклем өҫтөнлөк менән ҡарайҙар.

Ә ҡала танымаҫлыҡ булып үҙгәргән: аҙым һайын эреле-ваҡлы магазиндар, кафе-рестарандар, сауҙа йорттары, офистар, уйын автоматтары салондары ҡалҡып сыҡҡан. Былар барыһы ла шәхси милек бит инде. Шул тиклем нәмәләрҙе төҙөгәндәр, ҡалала аҡсалы кеше күп икән. Ә уның ауылдаштары хәҙер ун йыл эш хаҡы күргәне юҡ. Искәндәрҙең үҙенә быйыл ҡырҡ йәш тула, уның нәмәһе бар? Аҡһаҡ аяҡ, тәнендә ете яра, ҡаҡшаған нервылар, күкрәге тулы орден-миҙал, хәрби пенсия һәм атаһынан ҡалған иҫке йорт — уның бөтә мөлкәте.

Эйе, иҫән ҡалды. Шул тиклем мәхшәрҙән ни мөғжизә менәндер тере сыҡты. Татьянаның һуңғы хатынан һуң, алыштарҙа бөтөнләй үҙен ҡурсаламаһа ла, нишләптер үлтермәнеләр. Шундайын ут-ғәрәсәт эсенән иҫән-һау ҡотолғас, бәлки, бында ниндәйҙер мәғәнә барҙыр? Бәлки, уны алда яҡтылыҡ, бәхетле тормош көтәлер?

Ярты сәғәт тирәһе ял итеп алғас, Искәндәр урынынан тороп туҡталышҡа ҡарай һылтаңланы. Яраланған уң аяғы ҡаты һыҙлай ине. Ни ауыртыуын баҫа торған таблеткалары бөткән, ҡәһәрең. Юл ыңғайы

“Рюмочная”ға инергә тура килде. Тамаҡ ялғап сығыр, уға өйөндә бирәү ҙә әҙерләп тормай. Бер стакан араҡы эскәндән һуң ныҡ ҡына ашағас, һыҙланыуы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Кәйефе лә күтәрелеп китте. Күңелен биләгән ауыр уйҙар, хәсрәттәр таралғандай булды, ҡатмарлы проблемалар еңел генә хәл ителерҙәй күренде. “Ничего, пробьёмся, беҙ бит десантниктар!” тип үҙен дәртләндерҙе.

Ҡапылғара мейеһен еңел-елпе уй ҙа телеп үтте: эх, үҙемдең ротам бында булһа! Ниндәй рота! Әбйәлил егете пулеметсы Дәүләтов һәм Стәрлебаш егете гранатомётсы Кусәрбаев та етер ине миңә былар менән бәхәсте хәл итергә. Эх, шәп һуғышсылар ине, алыштарҙа һәр саҡ хәл иткес роль уйнанылар. Әле ҡайҙа икәнһегеҙ? Күпселек яугирҙар һымаҡ һеҙ ҙә эсеп йөрөйһөгөҙмө икән ауылдарығыҙҙа? Әҙәм була алһағыҙ ярар ҙа бит. Беҙҙең башҡорт һуғышта шәп тә ул. Яуҙан ҡайтҡас, эсеп тик йөрөйҙәр, ти шул, ишетеүенсә. Йәнә әҙерәк өҫтәргә уҡталғайны, кире уйланы, һуғыштан һуң тиҙ иҫертә башланы шул. Чечняла көн дә тиерлек эстеләр, әммә араҡы йүнләп алмай торғайны. Аҙаҡтан реабилитация үҙәгендә аңлаттылар: даими стресс кисергәндә кеше иҫермәй икән.

Искәндәр арып-талып ҡайтып етте лә йоҡларға ятты. Йонсоу үҙенекен иткәндер, иртәнгә тиклем бер ни белмәй йоҡлаған.

Иртән тороп тамаҡ ялғағандан һуң ишек алдына сыҡҡайны, Хатуевтың ҡара джибы уның йорто эргәһенә килеп туҡтаны. Колхоз хужаһы олпат һыпат менән машинаһынан төштө лә, Искәндәр янына килеп, күрешергә ҡулдарын һондо:

— Әссәләмәғәләйкүм, Хоҙай йортоғоҙға именлек бирһен.

— Вәғәләйкүмәссәләм, — тип яуапланы Искәндәр, күрешкәс.

Хатуев һүҙ башланы:

— Хәл-әхүәлдәрегеҙ нисек?

— Аллаға шөкөр, — тине Искәндәр уға, һынамсыл ҡарап ҡуйғандан һуң. Хужаның килеүе үҙе өсөн көтөлмәгәнерәк ваҡиға булһа ла, һыр бирмәҫкә тырышты. Бер килке әллә ни әһәмиәте булмаған нәмәләр хаҡында хәбәрләштеләр.

— Йомошоғоҙ булһа, идараға килегеҙ... — Хатуевтың уратып-суратыуы Искәндәрҙең һарыуын ҡайната башланы. Шуға күрә тынысһыҙланып уны бүлдерә һалды:

— Слушай, туған, беҙ һинең менән кабинетыңда “һин”гә күсеп тас та тос талашманыҡмы ни? Давай, ҡытай церемонияларын ташлайыҡ! Үпкәләмә, мин тура һүҙле кеше, ни йомош менән килдең?

Хатуевтың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Шулай ҙа үҙен ҡулға ала алды:

— Мин дә тура һүҙле кеше. “Яҡшы яуҙан яман солох яҡшыраҡ” тигән алтын мәҡәлде иҫеңә төшөрөргә иткәйнем. Шулай уҡ “Яңғыҙ яугир яу ҡайтармай” тип тә өҫтәргә ине.

Искәндәр был һүҙҙәрҙән хатта тетрәнеп китте:

— Ысынлап та мине яңғыҙ, тип уйлайһыңмы?

— Тағы бер аҙ кабинеттан-кабинетҡа йөрөһәң, үҙеңде бер кем дә яҡламаясағын күрерһең.

— Районда яҡламаһалар — Өфөгә, Президентҡа яҙам! Дөрөҫлөктө табам, колхозды кире ҡайтартам!

— Неужели шуны аңламайһың: мин бынан китһәм — хужалыҡ ҡына түгел, ауылың да юҡҡа сығасаҡ! Йәшәйештең нигеҙе — иҡтисад! Ауылығыҙҙың иҡтисады емерелгән, мин уны йүнәтергә теләйем! Унан һуң, хужалыҡҡа беҙ ун миллионға яҡын аҡса һалдыҡ һәм былай ғына китә алмайбыҙ. Бик тә беҙҙе ҡыуғың килһә — түлә ун миллионды, колхозды һиңә һатып китәбеҙ! Әйҙә, үҙең күтәр ауылыңды!

Искәндәр мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы.

— Беләм, һинең аҡсаң юҡ. Бөтә ауылығыҙ ғына түгел, районығыҙ менән тотонһағыҙ ҙа, ун миллионды йыя алмаясаҡһығыҙ! — Бер аҙ тын алғас, Хатуев һүҙен дауам итте. — Үпкәләмә, тура һүҙҙе үҙең талап иттең. Шулай итеп, колхозды кире һатып алырға мөмкинлегегеҙ юҡ, ә беҙ ул тиклем аҡсаны һеҙгә бүләк итеп ҡалдыра алмайбыҙ. Бәхәсте нисек сисәбеҙ һуң?

— Көҙгө уңышты йыйғас, бәлки, үҙегеҙҙең аҡсаларығыҙҙы ҡайтара алырһығыҙ, — тине Искәндәр.

Хатуев асыулы йылмайҙы:

— Был етди тәҡдим түгел. Ауылыңды бергәләп күтәрәйек. Бында тамыр йәйгән эскелек, иманһыҙлыҡ, боҙоҡлоҡто еңер өсөн һинең кеүек абруйлы кешеләр кәрәк. Кил миңә урынбаҫар булып! — Хатуев йортҡа ҡараш ташланы. — Өйөңдө яңыртып һалырһың, служебный машина бирермен. Беҙ бит мосолмандар, уртаҡ тел табырбыҙ.

Искәндәр мәғәнәле итеп йылмайҙы:

— Тәҡдимең өсөн рәхмәт. Миңә бындай шикарный тәкдимде бер кем дә яһағаны юҡ әлегә. Тик шуныһы бит әле: ярай, мин һәйбәт йәшәрмен, ти, ә ҡалған ауылдаштар нисек донъя көтөрҙәр? Тамаҡ хаҡына һиңә батрак булмаҫтармы?

— Коммунизм вәғәҙә итмәйем, яҡшы эшләһәләр — хур булмаҫтар.

Искәндәр уйға ҡалды:

— Һиңә булған ҡарашымды улай еңел генә үҙгәртә алмайым. Колхозды алыуың законлымы, ниәттәрең, ысынлап та, изгеме, тикшерергә кәрәк. Президентҡа хат яҙам. Ауыл халҡы менән кәңәшләшәм, улар был хатты хупларҙармы. Әгәр ҙә күпселек халыҡ, хатҡа имзаларын ҡуйып, мине хупלаһа, үпкәләмә, һиңә бынан китергә тура килер.

— Ә ауылдаштарың мине яҡлап, хатыңа ҡултамға ҡуймаһа, соҡсоноуыңды туҡтатаһыңмы?

— Һеҙгә ҡаршы ике һуғышта ла ҡатнашһам да, чечен халҡын хөрмәт итәм. Әммә һеҙҙең, бында килеп, еремә хужа булыуығыҙ оҡшамай!

”Депортация...” — тип һүҙен дауам итергә ниәтләгәйне Искәндәр, туҡтап ҡалды. Сөнки был һүҙҙе ишетеү менән Хатуев ағарынып китте. Искәндәрҙең һүҙе уның ата-олатаһынан, ғөмүмән, бөтә халҡынан күскән уңалмаҫ йөрәк яраһын ҡуҙғатты...

Дошманының йөҙөндә ҡыҫҡа ғына мәлгә сағылып киткән һыҙланыуҙы шәйләп, Искәндәр уға:

— Үпкәләштән булмаһын, тураһын һөйләшергә килештек, — тине.

Хатуевтың күҙҙәре ялтлап китте:

— Ул саҡта бөтә халҡыбыҙҙы илдән һөрә алмағандар! Күптәре тауҙарға ҡасып, һикһәненсе йылдарға ҡәҙәр совет власына ҡаршы һуғышҡан! Беренсе һуғышта был депортация өсөн беҙ тулыһынса ҡон ҡай-

тарҙыҡ һәм урыҫ шовинизмының кикреген шиңдерҙек! Һин уны яҡшы беләһең! — Хатуев ҡырҡа боролдо ла шәп-шәп аҙымдар менән машинаһы янына атланы.

Ауыртҡан еренә ҡағылдым, тип уйлап ҡуйҙы Искәндәр. Ошо мәл уның уйҙарын бүлдерҙеләр. Ялағай Вәлийән менән агент Минәхмәт ҡарт эргәһенә килеп һүҙһеҙ генә ҡул биреп күрештеләр. Ҡиәфәттәре ҡәнәғәтһеҙ ине. Улар ауылдың абруйлы, йоғонтоло кешеләре иҫәбендә йөрөй.

Сатлыков Вәлийән алтмышҡа етеп килә, уны ялағай Вәлийән тип йөрөтәләр. Әлбиттә, ул һәр кемгә ярамһаҡланмай, үҙенән өҫтәрәктәргә генә ярай белә. Ә үҙенән түбәнерәктәргә инде үтә лә талапсан һәм аяуһыҙ. Ғүмере буйы түрә-ҡара тирәһендә өйөрөлөп, бригадир, склад мөдире, завток вазифаларын башҡарҙы.

Этҡолов Минәхмәт — етмешкә яҡынлашһа ла, әлегә апаруҡ ныҡ күренгән, еңел һөйәкле ҡарт. Уны, әлбиттә, үҙе ишетмәгәндә агент Минәхмәт тип атайҙар. Хәҙер күп йылдар "орган"дарға, түрәләргә ауылдаштары өҫтөнән ошаҡ йөрөтә. Үҙе менән һүҙгә килешкән кешеләрҙе ғәҙәттә милицияға ошаҡлап тоттора. Әлбиттә, был "ил ағаһы" ла ғүмере буйы склад, ферма мөдире булып эшләгән һәм башҡа йылы урындарҙа "тир түккән" кеше. Пенсияға сыҡҡас, үҙенең балаларын, туған-тыумасаларын йыйып, васыят итеп әйткән, ти: "Һауа белһәң, колхоз — һауын һыйыры ул. Колхозға сат йәбешегеҙ!"

Ысынлап та, революцияға тиклем үтә лә ярлы-ябаға булған Сатлыковтар менән Этҡоловтар нәҫеленә колхоз бигерәк килешкән шул. Коллективизацияға хәтлем ат-һыйыр түгел, хатта кәзәләре лә булмаған. Сатлыковтарҙы йолҡоштар, Этҡоловтарҙы батрактар тип йөрөткәндәр. Шуға ҡарамаҫтан, ялағай Вәлийәндең атаһы йолҡош Шәүәли һәм агент Минәхмәттең атаһы батрак Тимерәй район түрәләре ҡушыуы буйынса мәсет манараһын ҡолатыуҙы ойошторопп, тәүге активистар булып киткәндәр. Был ҡара эш ҡылынған саҡта рәнйегән ауыл ҡарттары уларға бәддоға уҡып, устарының һырты менән "амин" иткәндәр.

Йолҡоштар һәм батрактар нәҫеленә совет власы ныҡлы килешеп, улар шул тиклем үрсеп киткән — бөгөнгө көндә фамилияларын ярты ауыл йөрөтә, һуңғы йылдарҙа хатта ике-өс быуын нәҫеллектәренә лә ҡарамай, бер-береһенә өйләнешә башланылар. Был никахлашыуҙар, әлбиттә, һәйбәт емештәр бирмәне. Мәктәп директоры Ришат әйтмешләй, "Тупой и еще тупее" фильмындағы кеүегерәк инде.

Әлеге көндә мәсет манараһын ҡолатыусы Сатлыковтар менән Этҡоловтар вариҫтарының күбеһе ауылда тиҙәк тибеп, йүнле донъя көтөү түгел, хатта ғаилә лә ҡора алмайынса, юҡ-бар нәмә эсеп ҡырылалар, иҫәндәре кеше көлдөрөп йөрөй. Күрәһең, ауыл ҡарттарының бәддоғаһы уларға төшкән.

Ниһайәт, Минәхмәт ҡарт мәғәнәле ҡиәфәттә тамағын ҡырып алды ла һүҙ башланы:

— Һин, мырҙа, ҡайтып та етмәгәнһең, ауылды болғатырға тотонғанһың, һин хәҙер, нисә йыл горячий точкаларҙа йөрөп, ауыл тормошон белмәйһең бит. Беҙҙең тормошҡа ҡыҫылма, ана воянный пенсияңды шым ғына ашап тик ят! Чечен Хатуевҡа бәйләнмә, эштәрендә

соҡсонма. Әлдә ул килеп сыҡты әле, беҙҙең бәхеткә, әтеү колхоз тамам бөтә ине.

— Эйе, эйе, ул колхозыбыҙҙы тергеҙә, ун йыл зарплата күрмәгәйнек, Хатуев аҡса түләй башланы! Беҙгә нисек тә көн күрергә кәрәк. Беҙгә тыныс йәшәргә ҡамасаулама, — тип йөпләне уның һүҙҙәрен ялағай Вәлийән.

Искәндәр ауыл "аҡһаҡал"дарына бер килке аптырабыраҡ ҡарап торғандан һуң телгә килде:

— Нисә быуын ауылдаштарыбыҙ аслы-туҡлы трудоденгә эшләп ошо колхозды тергеҙгән?! Хәҙер килеп уны буштан-бушҡа чеченға биреп ҡуйғанһығыҙ.

— Чечен булмағайы чурт булһын, зарплата ғына түләһен, — тип ҡысҡырҙы ялағай.

— Юҡ-бар зарплатаға алданып, бөтөнләй ерһеҙ ҡаласаҡһығыҙ!

— Яҡшы хаҡ бирһә — һатам еремде, — тип екерҙе ҡарт агент. — Ҡулынан килә икән — эшкәртһен әйҙә! Беҙ ул ерҙе нимә эшләтә беләбеҙ? Мыңарсы шәхси пайһыҙ йәшәнек, бынан һуң да йәшәрбеҙ!

— Революцияға тиклем ата-бабаларыбыҙ ер хужалары булған бит, һәр ир затына ҡырҡ дисәтинә ер бүленгән. Иген иккәндәр, күпләп мал аҫырағандар. Әле лә үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булып, эшләп йәшәрбеҙ!

— Заман башҡа — заң башҡа, — тине Вәлийән.

Ә Минәхмәт ҡарт иғтибар менән Искәндәргә ҡарап торҙо ла мәғәнәле төҫтә былай тине:

— Мин һине раскусил, мырҙа. Бына һин нимә көҫәйһең икән! Совет власына тиклем олатайыңдың атаһы Арыҫланов Солтан ҡарт мең дисәтинә ер иметь итеп, бихисап хеҙмәтселәр тотҡан! Һин шул ерҙәрҙе үҙеңә ҡайтарып алырға уйлайһың! Шуға күрә Хатуевтың колхозды һатып алыуына бәйләнәһең!

— Үәт, мироед, кулак ҡалдығы! Нисә быуын үтһә лә, кулак нәҫеле кулак булып ҡала икән әй-й, — тип таң ҡалып, тел шартлатты ялағай Вәлийән.

Агент Минәхмәттең көтөлмәгән һүҙҙәренән аҙап ҡалған Искәндәр телгә килде:

— Француз яуында күрһәткән батырлыҡтары өсөн ата-бабам зауряд сотник Байтурин Арыҫланға батша үҙе жаловать иткән ул мең дисәтинә ерҙе. Һәм ошонда беҙҙең ауыл — Арыҫлан ауылы барлыҡҡа килгән. Ә үҙең иҫкә алған Арыҫланов Солтан бай йотлоҡ килгәндә бөтә тирә-яҡ ауылдар халҡын тиерлек, шул иҫәптән һинең ата-бабаларыңды ла, Минәхмәт ағай, бушлай он биреп, астан үлеүҙән ҡотҡарып ҡалған.

— Ярай, һин батша заманындағы әкиәтеңде һөйләп торма бында! Әллә булған ул, әллә юҡ, берәү ҙә белмәй. Зато олатайыңдың атаһы Солтан бай тәүҙә Зәки Вәлидиҙең ғәскәрендә йөрөгән, аҙаҡ Зәки ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, уның менән килешмәйенсә, аҡтарға ҡасып китеп, ҡайҙалыр олаҡҡанмы? Олаҡҡан! Ә хәҙер килеп һин бында ата-бабаң ерҙәрен көҫәп йөрөйһөң! Не выйдет! Мең дисәтинә түгел, ете гектар пай ҙа бирмәйбеҙ, бына һиңә!

Минәхмәт ҡарт уға кукиш күрһәтте.

— Эйе, хәҙер ул ерҙәр һеҙҙеке түгел, колхоздыҡы! Нәфсеңде һуҙма колхоз еренә! Колхоз ерҙәрен һиңә биргәнсе, чеченға бирәбеҙ, — тип екеренде ялағай.

Минәхмәт ҡарт Искәндәргә яҡыныраҡ килеп яһил тауыш менән ыҫылданы:

— Беҙҙең тормошҡа ҡыҫылып йөрөһәң, герой-орденоносец тип тормаҫбыҙ, ҡара уны...

Искәндәр был тупаҫ һөмһөҙлөккә ни тип яуапларға белмәй аҙап ҡалды. Уға, өс һуғышта ҡатнашып, үлем менән күп тапҡырҙар йөҙгә-йөҙ осрашҡан һауа-десант ғәскәрҙәре майорына, ниндәйҙер бер йолҡош батрак нәҫеле ҡалдығы янап маташа... Искәндәр агент Минәхмәткә мыҫҡыллы ауыр ҡарашын йүнәлтте, йәшкә үҙенән күпкә өлкәнерәк кеше булмаһа, был әҙәм аҡтығын шунда уҡ йыға һуғыр ине. Минәхмәт ҡарт уның зәһәрле ҡарашын күтәрә алмайынса, бөршәйеп шымып ҡалды. Вәлийәндең дә өнө тығылды. Искәндәр һүҙһеҙ генә ел ҡапҡаны асты. "Ҡунаҡтар" шым ғына сығып шылдылар.

Уйға ҡалды Искәндәр: агент Минәхмәт уға ҡыҙыҡлы фекер әйтте. Әлбиттә, нәҫел-ырыуының боронғо ер биләмәләрен ҡайтарып алыу мөмкинлеге тураһында быға тиклем уйланғаны юҡ ине. Эйе, был, һис шикһеҙ, ҡыҙыҡлы идея. Тик әлеге лә баяғы шул инде, аҡса, капитал юҡ. Уның аҡса, байлыҡ менән бәйле булған һуғыш ваҡиғалары иҫенә төштө.

Бер мәл шулай, Афғанда саҡта, ҙур ғына дошман каруанын тар-мар иткәйнеләр. Йөктәрен ҡараһалар — ике ботҡа яҡын алтын ҡомо! Искәндәр шул тиклем хазинаны комбатҡа тапшырҙы. Командиры алтынды ни эшләткәндер, аҙаҡ һорашманы ла. Икенсе тапҡыр бер сумаҙан долларҙар ҡулына эләккәйне. Аҡсаларын иҫәпләп тә тормайынса, юғары түрәләргә илтеп бирҙе. Был байлыҡтарҙы, әмәлен табып, үҙләштереү уйы ул саҡтарҙа башына ла килмәгәйне хатта. Сөнки ул намыҫлы офицер, мародер түгел.

Эх, шул хазиналар әлеге мәлдә ҡулында булһа! Ике лә уйлап тормайынса колхозды сит-яттарҙан кире һатып алыр ине. Аҙаҡ ата-бабаларының боронғо биләмәләрен дә хөкүмәттән һатып алып, тыуған ерендә алдынғы хужалыҡ төҙөп, ауылдаштарын һәйбәт тормошта йәшәтер ине...

Искәндәр татлы уй-хыялдар донъяһынан гонаһлы ергә төштө. Шундай фекергә килде ул: агент Минәхмәт менән ялағай Вәлийәнде Хатуев ҡотортоп ебәргән. Тимәк, тыуған ауыл, ер өсөн көрәште дауам итергә кәрәк. Ул өйгә инде лә, ҡағыҙ-ҡәләм алып, Президентҡа хат яҙырға ултырҙы. Бер нисә сәғәттән хат әҙер ине. Искәндәр бик ҙур эш башҡарған кеше һымаҡ оло ҡәнәғәтлек менән яҙмаһын уҡып сыҡты. Әлбиттә, йөрәктән сыҡҡан был хат Президентыбыҙҙы битараф ҡалдырмаҫ. Ул бит үҙебеҙҙең милләт кешеһе. Берәй әмәлен табып, хужалыҡты чечендан кире алдыртыр. Быуаттар буйына ата-бабаларыбыҙҙың ҡаны менән һуғарылған изге еребеҙҙе сит-яттарға бирҙертмәҫ. Президент — үҙебеҙҙеке! Үҙеңдеке — үлтермәҫ, ят — ярлыҡамаҫ.

Төшкө аш ваҡыты еткәйне. Искәндәр ҡабалан-ҡарһалан ҡапҡылады ла, ашҡынып, хатына ҡултамғалар йыйырға сығып китте.

Урамда бөгөн дә әллә ни әҙәм заты күренмәй. Анау эскәмйәлә бер ағай ултыра, шуның янына йүнәлде. Был йәше етмешкә етеп барған Зариф бабай икән. Ул аңҡы-тиңке булып, йоҡомһорап ултыра ине.

— Һаумы, Зариф ағай, — Искәндәр күрешергә ҡулдарын һондо. Зариф ҡарт туҡтауһыҙ эсеүҙән илергән ҡарашын уға төбәне, күрешергә тип бысраҡ ҡулдарын ҡыбырҙатып ҡуйҙы. Ниҙер әйтергә иткәйне, ауыҙынан һеләгәйе ағып китте. Искәндәр күрешергә һонған ҡулдарын ытырғанып кире тартып алды. Шул мәл ҡарттың алама спецовка ыштанының лысма һыу икәнен шәйләне. Зариф ҡарттан шул тиклем ауыр еҫ килә ине. Искәндәр уның эргәһенән китергә ашыҡты. Үҙе тетрәнеп уйланы: йәшәгән йылдары уға аҡыл өҫтәп, ниндәйҙер кимәлдә рухи үҫеш биреп, иманға килтерергә тейеш тә инде. Ул бит әле балаларына, ейәндәренә именлек, бәхет теләп намаҙлыҡ өҫтөндә ултырырға бурыслы. Был ниндәй замана һуң, ололарҙың күбеһе иманһыҙ ҡартая?!

Искәндәр магазинға яҡынлашты. Көндөң эҫе булыуына ҡарамаҫтан, ишек төбөндә урта йәштәрҙәге бер ир ҡолас йәйеп йоҡлап ята ине. Был сәрхүш ҡояшта янып үлә бит инде, тип уйлап, Искәндәр уны күләгәгә күсереп һалды.

Магазин артынан шаулашҡан тауыштар ишетелде. Ҡараһа, бер төркөм йәш ир-ат шунда өйөп ҡуйылған бүрәнәләр өҫтөнә ҡунаҡлаған да, гәпләшәгәпләшә эсеп ултыра. Хатҡа имзалар ҡуйырға, ниһайәт, кеше табылды, тип ҡыуанып, Искәндәр улар янына килде:

— Һаумыһығыҙ, егеттәр! Эштәр нисек?

— Ашауға ҡарап...

— Ашау нисек һуң әтеү?

— Ашарға етә, эсергә етеңкерәмәй... — тип яртылаш шаярыу менән яуапланы ауылдаштары.

Искәндәр етди төҫ алып, һүҙҙе үҙенең маҡсатына ярашлы юҫыҡҡа борҙо:

— Егеттәр, мин һеҙгә бик етди мәсьәлә менән килгәйнем бит әле...

Искәндәр һатылған колхоз, ауыл, ер, халыҡ яҙмышы тураһында үҙенең уйҙары менән бүлеште, Президентҡа яҙған хатын уҡып ишеттерҙе. Ҡултамғалар ҡуйырға өндәне. Әммә уның ялҡынлы һүҙҙәре ауылдаштарына әллә ни тәьҫир итмәне, улар битараф ҡиәфәттә ултырыуҙарын белделәр. Ниһайәт, береһе телгә килде:

— Баш шаңҡый бит әле, абзый, һинең аҡыллы һүҙҙәрең сразу барып етмәй, төҙәтергә кәрәк ине.

— Эйе, эйе, хатҡа подпись ҡуйыр инек, ҡул ҡалтырай, — тине икенсеһе, ҡулдарын күрһәтеп.

— Абзый, ал бер яртыны! Баш төҙәткәс, ҡуйырбыҙ подпистәрҙе, — тине өсөнсөһө.

Искәндәр уларға сәйерһенеп ҡараны:

— Егеттәр, мин бит һеҙгә бик етди, хатта изге нәмәләр тураһында һөйләнем. Ә һеҙ банальный эске яғына бораһығыҙ.

— Һуң, абзый, нишләтәйек һуң, баш ярыла бит. Йәлләмә инде бер яртылыҡ рәтеңде! Бир, үҙем кереп алам. Баш төҙәткәс, подпись итербеҙ. Жалко что-ли ауылдаштарыңа бер ярты.

— Бер ярты — ерунда ул! Эш унда түгел бит, — Искәндәр һаман да нимәлер аңлатырға уҡталды.

— Шулай булғас, бир һуң!

Аптырағас, Искәндәр бер яртылыҡ сығарып бирҙе. Аҡсаны ҡулына эләктергәс, теге сәрхүш атҡа менгән кеүек ҡыуанып, магазинға йүгерҙе.

Баш төҙәткәндән һуң хатҡа имзаларын ҡуйҙылар. Шул көндөң кисендә Ришат дуҫы уны ашҡа алды. Ҡымыҙ һемереп, ашап-эсеп, әңгәмәләшеп ултырҙылар. Әлбиттә, һүҙ ауылдаштарының әлеге торошо хаҡында барҙы.

— Ауыл халҡы шул тиклем түбән тәгәрәгән тип башыма ла килтермәгәйнем. Бөтә республикала хәлдәр шулаймы икән?

— Әлбиттә, шулай. Рәсәй ауылдарында хәлдәр беҙҙекенән дә насарыраҡ. Унда ауылдарҙы емереү процесы күптән башланды.

— Шул ҡәҙәр иманһыҙлыҡ ҡайҙан килгән һуң беҙгә? Әле беҙ үҫкәндә генә халыҡ былай түгел ине бит, — тине Искәндәр, йөрәкһенеп.

Ришат был мәсьәләләр тураһында, күрәһең, күптән уйланып, ниндәйҙер һығымталар яһағандыр. Шуға күрә, күп көттөрмәйенсә, фекерҙәрен теҙеп китте:

— Халҡыбыҙҙың бындай көнгә төшөүе — бер нисә тиҫтә йыл ғына һөҙөмтәһе түгел. Батша Рәсәйенең быуаттар буйына алып барған колониаль политикаһы. Уға ҡаршы беҙҙең күтәрелештәр, унан һуңғы һуғыштар иң аҫыл заттарыбыҙҙы юҡ итеп, халҡыбыҙҙы ҡанһыратты. Аҙаҡ совет власы, сталинизм мәсеттәребеҙҙе емереп, халҡыбыҙҙы иманһыҙлыҡ һаҙлығына батырҙы, уға ҡол психологияһы һеңдерҙе. Кеше бит аңлы рәүештә тәүфиҡ, тәртип һаҡларға тейеш, ҡурҡып түгел.

— Совет власы ни өсөн Аллаһы Тәғәләне инҡар итергә тырышҡан икән?

— Конкуренция... Ленин һәм Сталин... Алла урынына табынырға үҙҙәрен тәҡдим иткәндәр.

Искәндәр һүҙҙе йәнә шул ер мәсьәләһенә борҙо:

— Батша Рәсәйе беҙгә ҡарата колониаль сәйәсәт алып барһа ла, башҡорт халҡының ергә аҫабалыҡ хоҡуғын таныған, хатта рәсми документтар менән раҫлаған. Ә совет власы, әлеге власть беҙҙең аҫабалыҡты һанға һуҡмай булып сыға, еребеҙҙе бында йәшәүсе бөтә халыҡтарға ла тигеҙ итеп бүлеп биргәс.

— Элек ергә хоҡуҡһыҙ сословиелар байтаҡ булған шул: типтәрҙәр, яһаҡ һалынған татарҙар, ерҙе арендаға алыусылар, припущенниктар, служивыйҙар һәм башҡалар. Эйе, ер пайҙары беҙҙә йәшәүсе бөтә халыҡтарға ла тигеҙ итеп бүленә икән, тимәк, беҙ боронғо аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ булып сыға.

— Әлеге ер пайҙарын һаҡлап алып ҡала алһалар ҙа, бик хуш...

— Халҡыбыҙ тәүбәгә килеп, эсеүен ташламаһа, иманға ултырмаһа — юҡҡа сығасаҡ, — тип ҡәтғи рәүештә әңгәмәне йомғаҡланы Ришат. Күпмелер һүҙһеҙ ултырғандан һуң өҫтәне: — Рәсәй зыялылары илде көрсөктән сығарыу өсөн милли идея эҙләйҙәр, әммә таба алмайҙар. Минеңсә, тарих һабаҡтарын онотоорға ярамай: тирә-яҡ халыҡтарҙы баҫып алып, буйһондороп, улар иҫәбенә йәшәп өҫкә сыҡҡан милләт, ил, иртәме-

һуңмы деградацияланып, көрсөккә барып терәлә, упҡынға тәгәрәй, хатта юҡҡа сыға. Ил, милләт хеҙмәткә, ғәҙеллеккә, изгелеккә, дингә, рухи ҡиммәттәргә таянып ҡына артабан үҫешә ала. Ошо хәҡиҡәтте аңлап, илдең сәйәсәтен, халыҡтың менталитетын үҙгәртергә тырышырға кәрәк... Һәм, иң мөһиме, быуаттар буйына һеңдерелгән ҡол психологияһынан арыныу фарыз. Уны, Чехов әйтмешләй, тамсылап сығарырға кәрәк халыҡтан.

...Искәндәр ҡултамғалар йыйып, ауыл буйлап дүрт-биш көн йөрөнө. Ауылдаштарының ҡайһы берәүҙәре "ҡул ҡуйһам, чечен тракторҙы аласаҡ, эшһеҙ ҡалыр хәлем юҡ" тип баш тартты. Бәғзеләре "былдай эшкә мин ҡыҫылмайым" тип йөҙ сөйөрҙө. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһе "ҡул ҡуйһаҡ, яңы хужа ғаиләбеҙгә көн күрһәтмәйәсәк" тип яуап бирҙе. Ир-аттарҙың бахмурҙан ҡаңғырып йөрөгәндәре генә күндәм булды, имзалары өсөн бер ярты, һис тә булмаһа "фанфурик" һораны...

Ауыл халҡының күпселеге Хатуевтың колхозды һатып алыуын хушһынмай, яңы хужаға эстән асыу тота ине. Ләкин тойғоларын күрһәтмәйҙәр, алдағы көнитмештәрен ҡайғырталар. Сөнки уларҙың аңына "колхозһыҙ йәшәй алмайбыҙ" тигән төшөнсә ныҡлы һеңдерелгәйне. Шуға күрә Хатуевҡа, һыуҙа батып барған кеше һаламға йәбешкән кеүек, сат йәбештеләр. Искәндәр уларға: "Революцияға тиклем ата-бабаларыбыҙ бер ниндәй колхозһыҙ ҙа бына тигән итеп йәшәгән. Беҙ түгел, илле градуслы һыуыҡта чукчалар ҙа болан үрсетеп, балыҡ тотоп йәшәй, ә монголдар сәнскәктән башҡа бер ни ҙә үҫмәгән Гоби сүллегендә лә дөйә аҫырап көн күрә. Уларҙың тормош шарттары менән сағыштырғанда беҙҙең илебеҙ бит — ожмах, хазина һандығы! Нимә генә юҡ бит тыуған төйәгебеҙҙә?! Иген сәсәм тиһәң — еребеҙ уңдырышлы, мал аҫырайым тиһәң — көтөүлектәр иркен, киҫәм тиһәң — урманы осһоҙ-ҡырыйһыҙ! Ә ер аҫты байлыҡтары?! Тыуған еребеҙҙә бит сереп байып йәшәрлек!" — тип аңлатып ҡараны. Әммә үҙенең һүҙҙәренә ауылдаштарын бер нисек тә ышандыра алманы...

Бер төндә Искәндәрҙең тәҙрәһенә мылтыҡтан аттылар. Быяла ватыҡтары сыңғыр итеп ҡойолоп төштө, һикереп тороп тәҙрә ситенән генә урамға ҡарағайны, ҡуҙғалып киткән еңел машинаның фара яҡтыһын ғына күреп өлгөрҙө. Әҙерәк тынысланғас, Искәндәр: "Хатуев һөжүмгә күсте. Үлтерергә теләһәләр, шунда уҡ атып китерҙәр ине, тимәк, ҡурҡытырға ғына уйлайҙар", — тигән һығымта яһаны.

Иртәнсәк Искәндәр төнгө атыу һөҙөмтәләрен ентекләп ҡарап сыҡты. Быяла ғына түгел, рам да селпәрәмә килгәйне. Яһау, тәҙрәне бүҫеп үтеп, ҡаршы стенаға барып ҡаҙалған. Искәндәр бысаҡ менән бүрәнәнән бер нисә дробь соҡоп алды. Дробтәр тос ҡына ине. Стенаға йәнә иғтибарлап ҡараһа — бүрәнә ярығында тағы дробь шәйләне. Соҡоп сығарғайны, ҡапылғара аҙап ҡалды. Усында дробь түгел, ә үҙенең һөт теше ине... Йыраҡ бала сағында, өләсәһе өйрәтеүе буйынса, изгегә юрап, бүрәнә ярығына ҡыҫтырып ҡуйған һөт теше. Имеш, тешәгән саҡта төшкән тешен стена ярығына ҡыҫтырһа, күп йылдар үткәс, ошо нигеҙҙә, нәҡ уның ише Искәндәр исемле малай үҫәсәк... Нигеҙ ҡоромаһын өсөн башҡарған йола инде был...

Эх, ул саҡтар... Алтын бала саҡ. Атай-әсәй, өләсәй, ғаилә йылыһында иҙрәп, бер ҡайғыһыҙ үҫкән бәхетле мәл. Балалар сыр-сыуынан гөрләп торған өйҙәре һүҙҙәр менән аңлата алмаҫлыҡ йылылыҡ, наҙ, һөйөү, бәхеткә шығырым тулы ине. Бына шул, ҡасандыр гөрләп торған атай йортонда Искәндәр япа-яңғыҙ ҡалды. Ҡайҙа ғәйеп булды һуң уларҙың берҙәм, бәхетле ғаиләһе, абруйы менән бөтә ауылға терәк булған ишле нәҫел-ырыуы, тирә-йүнгә даны таралған аҫыл ата-бабалары? Ниндәй аяуһыҙ ел-дауылдар ҡайҙарға алып китте һеҙҙе? Ай күрҙе, ҡояш алды...

Искәндәр дробтәр менән бергә усында ятҡан һөт тешенә оҙаҡ итеп ҡарап торҙо. Ошо мәл күпте күргән-кисергән, ут-һыуҙар үткән ҡырыҫ ирҙең күҙҙәренән бер нисә тамсы йәш килеп сыҡты. Һөт тешен ҡәҙерләп кенә кире урынына ҡыҫтырып ҡуйҙы. Шунан һуң, өңөрәйеп торған ватыҡ тәҙрә янына килеп, йән көсө менән теге дробтәрҙе тышҡа быраҡтырҙы. Уның һыҙланған күңеле Хатуевҡа ҡарата нәфрәт менән тулды. “Дошманды ваҡытында юҡ итергә кәрәк шул. Йәлләргә ярамай. Йә һин уны, йә ул һине... Нишләргә икән? Нисек ҡон ҡайтарырға? Хәҙер үк барып, дошманды ярандары менән бер итеп дөмөктөрөргәме әллә? Улайтһаң, был ябай криминал була. Улай ярамай. Мин бит бандит түгел, яугир офицер. Дуэлгә саҡырһам?.. Был да законһыҙлыҡ була. Хатуевты законлы рәүештә ауылдан һөрөргә кәрәк. Президентҡа яҙған хатты, тиҙерәк барып етһен өсөн, Өфөгә үҙе алып барып тапшырасаҡ. Төнгө атыу тураһында, оялмайынса, милицияға хәбәр итеп тормаҫ. Инцидентты, ирҙәрсә, үҙе асыҡлар”.

Тышта шау-шыу ишетелде. Ватыҡ тәҙрә аша ҡараһа — ихатаға егермеләп кеше килеп тулған. Күбеһе Сатлыковтар һәм Этҡоловтар нәҫеленән. Агент Минәхмәт, ялағай Вәлийән, хатта донос Бибиниса ла бында. Былар нишләп йөрөй икән, тип уйлап та өлгөрмәне Искәндәр, тәҙрәгә Минәхмәттең эсеп, аҙып-туҙып йөрөп, утыҙҙы уҙһа ла һаман өйләнмәгән кинйә улы Кәбирҙең ялбыр башы һонолдо:

— Хатыңды апсыҡ! Беҙ ҙә пудпис итәбеҙ, әтеү баш ауырта... Колхозды һин генә ҡайғыртаһыңмы ни?!

Эргәһендәгеләр хихылдашып алды. Искәндәр аптырап ҡалды: был кешеләр хатҡа ҡаршы инеләр бит... Былар ҙа ҡултамғаларын ҡуйып, баш төҙәтмәксе инде әтеү. Ни эшләмәк кәрәк, кешеләрҙе көттөрөп булмай бит, өҫтәлдән хатты алды ла йорт алдына сыҡты.

— Давай-давай, беренсе булып ҡул ҡуям! Түлке тәүҙә уҡып сығам. — Кәбир хатты ҡулына алды. — Тәк-тәк... Башҡортостан Президентына... Хатуевтың нисә быуын ауылдаштарыбыҙ тир түккән колхозыбыҙҙы арзан хаҡҡа һатып алыуының законлылығын тикшертеүегеҙҙе үтенәбеҙ. Халҡыбыҙҙы ерһеҙ ҡалдырырға ярамай. Башҡорт халҡын ҡоткарыр, тергеҙер өсөн ауылды күтәрергә кәрәк. Ауыл бөтһә — башҡорт бөтә, башҡорт бөтһә — Башҡортостан юҡҡа сыға... — Уның инабатһыҙ тауыш менән хатты уҡығанын мәрәкә итеп тыңлаусы кешеләр мыҫҡыллы ҡиәфәттә ауыҙҙарын йырҙылар. Әммә төнгө атыуҙан нәфрәтләнгән һәм үҙенең һөт тешен табыуҙан тетрәнгән Искәндәр уларҙың был ҡыланышын әлегә бик шәйләмәне. Кәбир хатты атаһына һуҙҙы:

— Мә, атай, әбрәкәйгә барырға кәрәгер.

Барыһы ла иһаһайлап көлөп ебәрҙеләр. Бер Искәндәр генә аптырап тороуын белде. Агент Минәхмәт хатты алды ла, уға күҙ һалғас:

— Әһә-ә... Мәктәп директоры подпись иткән. Ҡалғандары әтрәгәләм. Был ялыу әбрәкәйгә барырға ла яраҡһыҙ... — тине лә, хатты йыртҡылай башланы. Искәндәр уға уҡталды. Тик шунда уҡ уның юлын бүлергә тырыштылар. Искәндәр Кәбирҙе йыға һуҡты, йәнә бер нисә кешене уңлы-һуллы түңкәрә бәрҙе. Быны күреп, бүтәндәре лә уға ташланды.

Мина ярсығы эләгеп, уң аяғына аҡһаҡ булыуына ҡарамаҫтан, Искәндәр һуҡһа — өҙә һуға. Кәре китмәгән икән әле, ҡаршаҡтары эрзинкә туп ише уның йоҙроҡтарынан кәклегеп осоп торҙолар, һуғышыу уға шул тиклем еңеллек, ләззәт килтерҙе, йылдар буйы йыйылған һағыш-һыҙланыуҙары, тән һәм йән ғазаптары онотолғандай булды. Ул дошмандарының һүгенеүҙәрен дә, ауыртыуҙан ыңғырашыуҙарын да, ҡатышмаған эше булмаған, ялыу ебәрмәгән урыны ҡалмаған донос Бибиниса ҡарсыҡтың әсе тауыш менән сәрелдәүен дә ишетмәне. Ниндәйҙер һағышлы йылмайыу менән дошмандарын дөмбәҫләүен белде. Ни аралалыр бында килеп туҡтаған джиптан төшөп, уҫмаҡлашыуҙы иғтибар менән күҙәткән Хатуев ярандарына ҡарап әйтеп ҡуйҙы:

— Джигит!

Күпме ваҡыт үткәндер, бер мәл уңайын тура килтереп, агент Минәхмәт аҫтыртын рәүештә артынан килеп күҫәк менән уның башына һуҡты. Искәндәр киҫелгән имән кеүек “аһ” итеп ергә ауҙы. Дөмбәҫләнеп, асыуҙан шашынып күҙҙәре аларған әҙәм өйөрө уға ябырылып, типкеләргә тотондо. Ошо мәл ҡулына ”фанфурик” тотҡан Хәмит пәйҙә булды. Ул килгән ыңғайы шешәһе менән Этколов Рәйестең башына һуҡты. ”Фанфурик” ватылғас, түгелгән эсемлеккә үкенесле төҫтә ҡарап торҙо ла шешә ҡалдығы менән Сатлыков Рәзифтең эсенә төрттө:

— Ҡорһағыңды ярам!

Аңғармаҫтан уны ялағай Вәлийән һуғып осорҙо. Искәндәрҙе типкеләүҙәрен дауам иттеләр. Ләкин уларға Ришат ҡамасауланы. Эргәләренә бер нисә һикереүҙә килеп етте лә асыуҙан күҙҙәренә ҡан һауған ауылдаштарын Искәндәр эргәһенән төрткөләп ебәрҙе:

— Нишләйһегеҙ?! Аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә?! Туҡтағыҙ!

Ришат хәрәкәтһеҙ ятҡан дуҫына эйелеп, аңына килтерергә иткәйне, Вәлийән аңғармаҫтан уның башына типте. Минәхмәт ҡарт күҫәге менән арҡаһына һуҡты:

— Быныһы — ҡултамғаң өсөн! Һиңә күптән ҡул ҡысый ине.

Ҡалғандары уларға ҡушылып, ерҙә ятҡан Искәндәр менән Ришатты, Хәмитте бөтөнләй тапап ташларға керешкәйнеләр — уларға чечендар ҡамасауланы. Күҙҙәре аларып, йыртҡыс сүрәтенә кергән әҙәмдәрҙе этеләп-төрткөләп ебәрҙеләр ҙә, Искәндәр менән Ришатты һуштарына килтереп, торорға ярҙам иттеләр.

Аңына килеп, аяғына баҫҡас та, Искәндәр һеләүһен етеҙлеге менән дошмандарына һикерҙе, агент Минәхмәт һәм ялағай Вәлийәнде елкәләренән эләктереп алып, бер-береһенә шаңҡыта бәрҙе. Ләкин тегеләргә йығылырға бирмәне, йән асыуынан ни ҡылғанын үҙе лә аңлап еткер-

мәйенсә, икеһен ике ҡултыҡ аҫтына ҡармап алып, ғыжылдатып быуа башланы. Чечендар Искәндәрҙең тимер ҡоршау һымаҡ ҡыҫылған ҡулдарынан хырылдай башлаған теге меҫкендәрҙе айырырға тотондолар. Шул мәлдә сиренаһын ҡысҡыртып милиция машинаһы килеп туҡтаны. Милиционерҙар йүгерешеп килеп Искәндәрҙән тегеләрҙе көс-хәл менән айырып алдылар ҙа, ҡулдарын бығаулап, машинаға индереп бикләнеләр.

Эштең ниҙә икәнен һорашып, акт-протоколдарын тултырғандан һуң, Искәндәрҙе ҡалаға алып китеп, изоляторға ябып ҡуйҙылар.

Иртәгәһенә уны следователгә һорау алырға алып барҙылар. Ләкин тәфтишсенең һүҙҙәре уға барып етмәне. Бер аҙҙан һуң Искәндәр:

— Адвокатһыҙ бер ни ҙә һөйләмәйәсәкмен, — тип ҡырт киҫте.

Пеләш башлы, һарғылт йөҙлө ҡырҡ биш йәштәрҙәге тәфтишсе уны һынсыл ҡарашы менән быраулағандан һуң:

— Бик яҡшы, — тине лә, өҫтәл аҫтындағы төймәгә баҫып, төрмә ҡарауылсыһын саҡырҙы. — Алып китегеҙ!

Дөрөҫөн әйткәндә, Искәндәр ниндәйҙер уй-маҡсат менән адвокат талап итмәне. Әлеге мәлдә уның бер кем менән дә һөйләшкеһе лә, бер кемде күргеһе лә килмәй ине. Ул үҙ-үҙенә бикләнде. Күҙ алдынан агент Минәхмәт, ялағай Вәлийән, донос Бибиниса һәм башҡаларҙың асыуҙан илергән йөҙҙәре китмәне. Ул нараһына ҡунаҡлап, күпмелер ваҡыт түшәмгә ҡарап ятҡандан һуң, онотолдо...

Бына ғәжәп... Искәндәр бер тәүлектән ашыу йоҡлаған да ҡуйған. Исмаһам бер төш күрһәсе, бер нәмә белмәй, үлек кеүек йоҡлаған. Уянғас, бер аҙ түшәмгә ҡарап уйланып ятты. Хәле былай түҙерлек ине, тән-маҙары әллә ни һыҙламай, әҙерәк башы ғына сәнсеп-сәнсеп ала. Кәйефе лә кисәге кеүек түгел, һәр хәлдә, асыуҙан һарыуы ҡайнай, әлбиттә.

Искәндәр тотҡондар менән шығырым тулы ҙур ғына камераны ҡарашынан үткәрҙе, һәр кем үҙ шөғөлө менән мәшғүл: кәрт уйнайҙар, гәпләшеп ултыралар, ҡайһылары тамаҡ туйҙыра, ара-тирә көлөшөп алалар, һүгенеп ебәрәләр.

— Ә-ә, уяндыңмы? Үәт йоҡлайһың, — тип өндәште бер әҙәм уның янына килеп. Һынсыл ҡиәфәттә Искәндәргә ҡарап һүҙен дауам итте:

— Әйҙә, смотрящийға, на ковер!

Камера паханы, йәғни “смотрящий” таҙа кәүҙәле, ерән сәсле, утыҙ биш йәштәрҙәге әҙәм ине. Эскә батҡан күҙҙәре менән Искәндәрҙе бер аҙ быраулап торғас, өндәште:

— Кто ты по воле?

— Отставной майор воздушно-десантных войск Российской армии Арсланов.

— А-а, мент что-ли, — тип һүҙгә ҡатышты оҙон, ябыҡ кәүҙәле, ҡаҡса йөҙө ҡомаҡҡа тартым берәү.

— Цыц, шушера, — тип екеренде уға пахан.

“Ҡомаҡ”ҡа яҡыныраҡ торған берәү уға сәпәп ебәрҙе:

— Не встревай в базар, хорек! Не видишь что-ли, он солдырь, а не мент, — тине.

— Которая ходка? — Пахан һорауҙарын дауам итте.

Искәндәр һорауҙың айышына төшөндө: нисәнсе тапҡыр төрмәлә ултыраһың, тип ҡыҙыҡһына бит “смотрящий”.

— Первая.

— За что загребли? Что шьют?

— Конфликт деревенского масштаба, — тип яуапланы Искәндәр. Шунан һуң, паханға аңлашырлыҡ булһын өсөн, групповая драка, тип өҫтәне.

— А-а, понятно, баклан... — тип һуҙҙы пахан мыҫҡыллыраҡ ҡиәфәт менән. — Грёв с воли можешь иметь? Бухало, дурь, бабки, хавку?

— Вряд ли, у меня почти никого нет.

Пахан уға ҡарата ҡыҙыҡһыныуын бөтөнләй юғалтты:

— Ладно, иди, будет тема — обращайся.

Искәндәрҙе йәнә һорау алырға өс көндән һуң ғына алып киттеләр. Ул үҙенең әлеге хәленә бер аҙ күнегә биреп, тыныслана төшкәйне.

Һорау алыу бүлмәһендә уны сюрприз көткән икән. Теге һарғылт йөҙлө тәфтишсе урынында... бер ҡыҙмы, йәш ҡатынмы ултыра. Ҡара-ғусҡыл йөҙлө, һыҙылып киткән ҡара ҡашлы, төн кеүек ҡара күҙле, ҡалын ҡара толомло һылыу ҡыҙ. Уның Көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙарына хас матурлығы күптән өлгөрөп тулышҡан емеште хәтерләтә. Үҙе кәүҙәгә ярайһы таҙа, эре генә һөйәкле. Бөтә булмышынан ниндәйҙер, әлегә исраф ителеп өлгөрмәгән наҙ бөркөлөп тора. Йөҙө нурлы, нисектер үҙенсәлекле, һөйкөмлө.

Искәндәр уға ҡарап таш һын кеүек ҡатты ла ҡалды. Йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып тулай башланы, еңелсә генә башы әйләнеп китте, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, һылыу ҡыҙ уға күкшел томан эсендә һымаҡ күренде.

Искәндәрҙең йөрәкһенеүе ҡыҙға ла күсте, ҡарағусҡыл йөҙө алланып, тағы ла йәмләнеп китте. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡылы үҙ ваҡытында кейәүгә сыға алмаған “ҡарт ҡыҙ”ҙарға (уға утыҙ йәштәр самаһы ине), яңғыҙ ҡатындарға хас һынсыл, ниһайәт, үҙенең парын табырға өмөтләнгән ҡарашын тотҡонға төбәп, ысын ир-егеттәрҙән бөркөлгән күҙгә күренмәгән көс-ҡеүәт нурҙарына ҡойоноп, оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙы. Ахырҙа иҫен йыйып алып, яғымлы тауыш менән өндәште:

— Мин һеҙҙең адвокатығыҙ Абдуллина Гөлфирә Исламовна булам, һеҙҙең эшегеҙ менән ҡыҫҡаса таныштым. Ә хәҙер миңә түкмәй-сәсмәй бөтәһен дә һөйләп бирегеҙ, зинһар өсөн.

Бик оҙаҡ һөйләшеп ултырғандан һуң, теләмәй генә хушлаштылар.

— Бик бөтөрөнмәгеҙ, һеҙгә яуыз хулиганлыҡ, кешеләрҙе туҡмау, милли экстремизм кеүек ауыр ғәйептәр таҡһалар ҙа, һеҙҙе аҡлап, төрмәнән ҡотолдороу өсөн бөтәһен дә эшләрмен.

Улар судҡа тиклем күп тапҡырҙар осрашты әле. Күрешеүҙәрен икеһе лә түҙемһеҙләнеп көтөп алды. Ут һымаҡ тоҡанып киткән тойғоларын икеһе лә аныҡ аңлаһа ла, хистәре хаҡында өндәшмәнеләр. Уларға, бәлки, һүҙҙәр кәрәкмәгәндер ҙә, эске хис-кисерештәрен бер-береһенә күҙ ҡараштары, ҡиәфәттәре былай ҙа асыҡ һөйләй ине.

Гөлфирә Исламовна Искәндәрҙе бәләнән ҡотҡарыр өсөн мөмкинен дә, мөмкин булмағанын да — барыһын да эшләне. Афған, Чечен һуғышы ветерандары ойошмаларынан, йәнә әллә ниндәй йәмғиәттәрҙән уны

яҡлаусы ҡағыҙҙар юллап алды. Ғишыҡ утында янған ҡатын-ҡыҙ күп нәмәләргә һәләтле икән...

Дүрт айҙан һуң суд булды. Прокурор Искәндәргә ете йыл срок биреүҙәрен талап итте. Шаһиттарҙың күрһәтеүҙәрен тыңланылар. Улар араһынан район хакимиәте башлығы Сатканов ҡына Искәндәрҙең ғәйебен йәмғиәткә ҡаршы үтә хәүефле енәйәт, тип баһалап, уны оҙаҡҡа ултыртырға кәрәклеген иҫбатларға тырышты.

Ни ғәжәптер, агент Минәхмәт тә, ялағай Вәлийән дә, донос Бибиниса ла, башҡалар ҙа үҙҙәренең шаһит сифатындағы сығыштарында Искәндәргә ҡаты бәрелмәнеләр.

Уны яҡлап Ришат төплө сығыш яһаны. Балалыҡ дуҫы Хәмит, ғөмүмән, бөтә ғәйепте үҙенә алырға тырышты:

— Хөрмәтле суд! Мин шаһит түгел, мин — енәйәтсе! Арыҫлановтың бер ғәйебе лә юҡ! Этҡолов Рәйестең башына мин ”фанфурик” менән һуҡтым, шешә ватығы менән Сатлыков Рәзифтең ҡорһағына мин сәнстем! Һуғышты мин башланым! Искәндәрҙең бер ғәйебе лә юҡ! Уны ебәрегеҙ, ә мине төрмәгә ултыртығыҙ!

Ошо мәл залдан Рәзиф ҡысҡырып ебәрҙе:

— Төрмәгә ҡасып, анһат ҡына ҡотолорға уйлайһыңмы? Ә минең яраны көн һайын һөртөргә кем ”фанфурик” апкилә?

Ауылдағы бәрелештән һуң, ни мөғжизәлер, Хәмит ҡалаға барып эскелектән дауаланып ҡайтҡан икән. Шунан бирле ауыҙына ла алмай, ти. Төҫ-башы әҙәмгә оҡшап ҡалған. Ә Рәзиф, йәнәһе, яраһына һөртөргә кәрәк тип, Хәмиттән көн дә бер ”фанфурик” алдырта икән.

Судҡа килгән ғәм халыҡты иң ныҡ таң ҡалдырғаны колхоздың яңы хужаһы — чечен Хатуев булды. Уға һүҙ бирелгәс, Искәндәр, хәҙер бөтөрә мине был дошман, бөтәһе өсөн дә үс аласаҡ, тип уйлап өлгөрҙө.

— Хөрмәтле судья, хөрмәтле прокурор! Ауылда килеп тыуған инцидентта Арыҫлановтың бер ғәйебе лә юҡ. Был хәлде осраҡлы аңлашылмаусанлыҡ тип ҡабул итеүегеҙҙе һорайым. Искәндәр Арыҫланов — хөкүмәт тарафынан орден-миҙалдар менән бүләкләнгән хөрмәтле шәхес. Ул ысын ир-егет, джигит. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең ауылда ундай кешеләр бик һирәк. Ауылдаштарыбыҙ Этҡолов Минәхмәт, Сатлыков Вәлийән һәм башҡаларҙың провокацион рәүештә уның өйөн барып баҫыуҙары арҡаһында килеп сыҡҡан хәл был. Арыҫлановты порукаға алам, бына рәсми ҡағыҙ һеҙгә. Уны эш менән тәьмин итәсәкмен. Уны төрмәгә ултыртмауығыҙҙы үтенәм...

Искәндәр был һүҙҙәрҙе ишеткәс, үҙ ҡолағына үҙе ышанмайынса, аҙап ҡалды. Был нимә булды һуң әле? Быны нисек аңларға? Ул бит минең иң яуыз дошманым... Был берәй аҫтыртын ҡапҡан, провокация түгелме икән? Ул ныҡлы ғәжәпләнгән ҡарашын Хатуевҡа төбәне. Ә ул “аптырарлыҡ бер ни ҙә юҡ” тигән ҡиәфәттә тыныс ҡына ултырыуын белде.

Шул мәлдә Иҙрис йәнәшәһендә ултырған Ришаттың ҡолағына шыбырланы:

— Бына ни өсөн агент Минәхмәт менән ялағай Вәлийәндең ҡойроҡтары ҡыҫылған икән...

Ниһайәт, Искәндәргә лә һуңғы һүҙ бирҙеләр. Ул ауырлыҡ менән урынынан торҙо ла һүҙ башланы:

— Хөрмәтле судья, хөрмәтле прокурор һәм башҡалар! Ил ҡушыуы буйынса өс һуғышта ҡатнаштым. Бының өсөн илебеҙ миңә орден-миҙалдар бирҙе, ә үҙе мине ҡулланды ла, һуғыштары арҡаһында бөтә ғәзиз нәмәләремдән яҙҙырып, хатта гражданлыҡһыҙ ҡалдырып, илһеҙ берәҙәккә әйләндерҙе, сүплеккә ташланы.

Бөгөнгө көндә мин — илһеҙ, ғаиләһеҙ, өйһөҙ, бер нәмәһеҙ, бер кемгә кәрәкмәгән кеше. Мин хатта үҙемдең ауылдаштарыма ла хәжәт түгелмен, улар өйөмдө баҫып кереп, фактически мине ҡыуҙылар.

Ҡайтҡас, шуны күрҙем — тыуған еремде лә юғалтҡанмын икән. Яттарға эйәреп, ситтәрҙе яулап йөрөгән сағымда үҙемдең тыуған ауылымды һатып алғандар. Кешенекенә ҡул һуҙһаң — үҙеңдекенән ҡалаһың икән... Хәҙер аңлайым, миңә тыуған еремдә ҡалырға кәрәк булған. Шулай итһәм, бер нәмәмде лә юғалтмаҫ инем. Үҙебеҙҙә йәшәһәм, ауылдаштарыма шул тиклем эсеп боҙолоп, ерһеҙ ҡалырға, колхозыбыҙҙы һатырға юл ҡуймаҫ инем, бәлки.

Бында чечен Хатуев ғәйепле түгел. Улар булмаһа, үзбәк-тажиктар, йәиһә вьетнам-ҡытайҙар һатып алыр ине. Эсеп иманһыҙланып, кешелектән сығып өрәккә әүерелеп бөткән меҫкендәр нисек итеп ерен һаҡлап алып ҡала алһын инде... Шул тиклем бай ерҙә йәшәп ошондай меҫкенлеккә, түбәнселеккә төшкәнбеҙ икән, беренсе нәүбәттә үҙебеҙ ғәйепле.

Юғалтыуҙарымдың иң ауыры — илде һаҡлап, илһеҙ ҡалыуым. Наградалар бирҙеләр — гражданлығымды алдылар. Ә беҙҙә ҡайҙа барһаң да паспорт таптыралар. Шуға күрә орден-миҙалдарымды хөкүмәткә кире бирәм, уларҙы алһындар, лучше миңә паспорт бирһендәр.

Ошо донъяла минең һуңғы нәмәм — шәхси азатлығым ғына ҡалғайны. Уныһы һеҙҙең ҡулығыҙҙа, хөрмәтле хөкөмдарҙар.

Искәндәр орден-миҙалдарын һаҡсыға тотторҙо. Ә милиционер уларҙы судья өҫтәленә илтеп һалды.

Залда тынлыҡ урынлашты. Шунан һуң адвокатҡа һүҙ бирелде. Гөлфирә Исламовна, үҙ биләмәһен һаҡлаған инә юлбарыҫ һымаҡ, алышҡа ташланды. Ни арала үҙенең иң ғәзиз кешеһенә әүерелеп өлгөргән тотҡондо бөтә аҡыл-зиһенен, күңел көсөн һалып яҡланы. Сығышын ошо һүҙҙәр менән тамамланы:

— Әгәр ҙә бөгөн Арыҫланов төрмәлә ҡалдырыла икән, күп кешеләрҙең ғәҙеллеккә ҡарата ышанысы юғаласаҡ, былай ҙа ныҡлы ҡаҡшаған хөкүмәт бинаһының нигеҙенән тағы бер кирбес һурып алынасаҡ...

Суд хөкөм ҡарары сығарыу маҡсатында кәңәшләшергә китте.

Күпме ваҡыт үткәндер, ул Гөлфирә Исламовнаға бик оҙаҡ булып тойолдо. Ниһайәт, бойороҡ яңғыраны:

— Баҫығыҙ, суд бара!

Судья һәлмәк тауыш менән хөкөм ҡарарын уҡый башланы:

— Суд, адвокат Абдуллинаның дәлилдәре менән килешеп, хөкөм ителеүсе Арыҫлановтың енәйәт составынан милли экстремизмда ғәйепләүсе статьяны алып, 206-сы статьяның 1-се пунктын ҡалдырырға булды. Отставкалағы майор Арыҫлановтың һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтарын, наградаларын, алған яраларын, төрлө ижтимағи ойошмаларҙан килгән уны яҡлаусы һәм ыңғай баһалаусы ҡағыҙҙарҙы, конфликтта зыян күреүселәрҙең уға ҡарата претензиялары юҡлығын раҫлаусы суд алды-

нан ғына килгән ғаризаларҙы, шулай уҡ “Башҡортостан” крәҫтиән хужалығы етәксеһе Хатуевтың үтенесен дә иҫәпкә алып, Арыҫланов Искәндәр Ғайса улын Енәйәт кодексының 206-сы статьяһының 1-се пункты буйынса, хулиганлыҡ ҡылыуҙа ғәйепләп, өс йыл срокка хөкөм итергә ҡарар сығара... — Судья бер мәлгә туҡтап ҡалып, иркенләп тын алды. Зал “аһ” итте лә, шомло тынлыҡ урынлашты. — Суд сығарған яза шартлы рәүештә үтәлергә тейеш, — тип һүҙен тамамланы хөкөмдар.

Залдағы кешеләр еңел һулап ҡуйҙылар, ҡәнәғәт ҡиәфәттә геүләшә башланылар.

Искәндәрҙе шунда уҡ һаҡ аҫтынан сығарҙылар. Дуҫтары Ришат, Иҙрис, Хәмит уны ҡосаклап алып, шатлыҡлы шаулаштылар.

Йөҙөн бәхетле йылмайыу яҡтыртып, тағы ла матурланыбыраҡ киткән Гөлфирә Исламовна уның янына килеп ҡулын ҡыҫты:

— Ҡотлайым... — Искәндәргә уның йөҙөнән бөткөһөҙ наҙ һибелде. Ошолай бер-береһенә ҡарашып күпмелер торғас, Гөлфирә Исламовна бер һүҙ әйтмәйенсә уны етәкләп өйөнә алып ҡайтты ла китте.

Шулай, көтмәгәндә-уйламағанда улар үҙҙәренең ҡайҙалыр аҙашып йөрөгән, күптән эҙләгән бәхеттәрен таптылар. Теүәл бер йылдан Гөлфирә уға малай табып бирҙе, йәнә ике йылдан ҡыҙҙары тыуҙы.

Төрмәнән сыҡҡас та, Искәндәргә һәйбәт эш табылды. Коммерция банкыһының хәүефһеҙлек хеҙмәтендә. Күптән түгел уны бүлек етәксеһе итеп үрләттеләр. Афған, Чечен һуғышы ветерандары ойошмаһы юллауы буйынса өс бүлмәле фатир бирҙеләр. Гражданлыҡ та алды. Шөкөр, донъялары түңәрәкләнде лә ҡуйҙы.

Искәндәр өсөн бик оҙаҡҡа һуҙылған ҡара көндәр инде өмөтө өҙөлөп бөттө тигәндә көтмәгәндә тамамланды ла, яҙмышы йөҙ һикһән градусҡа боролоп, бәхетле һыҙат башланды.

Иң мөһиме, бер ваҡытта ла өмөттө өҙөргә ярамай икән, ошо донъялағы үҙеңдең өлөшөң, бәхетең өсөн көрәшергә, яҡтылыҡҡа ынтылырға кәрәк. Шайтан ғына өмөтһөҙ.

## Эпилог

Шөкөр, Искәндәрҙең атай йорто нигеҙе лә ҡороманы. Һеңлеһе Фирҙәүес һигеҙ йәшлек улы Искәндәр менән эскесе иренән айырылып ҡайтты.

Ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейгәс, етемһерәп ҡалған йортҡа йәм инеп, яҡтырып китте. Ялҡынланып янған усаҡ утына ҡарап ултырған улы:

— Нишләп атайым шул араҡыны туймаҫтай булып эсә икән? Үҫкәс мин уны бер ваҡытта ла эсмәйәсәкмен, — тип, әсәһен ҡосаҡлап алды.

Фирҙәүес һағышлы йылмайып ҡуйҙы:

— Эсмәҫһең, улым, эсмәҫһең. Ул шайтан һыуын эсмәһәң, бөтә тормошоң да ал да гөл булыр...

Малай ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әсәй! Ҡара әле, тешем төштө! — Һәм ынйы кеүек ап-аҡ һөт тешен күрһәтте.

— Тешеңде бүрәнә ярығына ҡыҫтыр, улым. Шулай итһәң, күп йылдар үткәс, ошо нигеҙҙә нәҡ һинең кеүек Искәндәр исемле малай йәшәйәсәк...

Амин.